ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Декабрь



Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
АМАНАТ

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!

# БЕҘҘЕН ЛАУРЕАТТАР!

**2010 йылда журналда баҫылған әҫәрҙәр араһында иң уңышлыларын карап, “Аманат” редколлегияһы быйыл “Аманат” журналының Мифтахетдин Акмулла исемендәге премияһына лайыҡлылар тип түбәндәге авторҙарҙы тапты:**



**Илдус Хәмит улы Тимерханов,** яҙыусы, “Юлдаш” Дүртөйлө ҡала-район гәзите хеҙмәткәре – 6-сы һанда баҫылған “Ҡарабәрҙе буйында” әкиәте өсөн;



**Илдар Миҙхәт улы ҒӘБИТОВ**, Башҡорт дәүләт университеты доценты – “Аманат” журналында даими сығып торған тематик башватҡыстары өсөн;



**Артур Әхмәтйән улы ТАПАҠОВ**, “Аманат” журналының биҙәлеш мөхәррире – журналда “Аманат” коллекцияһы”, “Шәп малай” рубрикаларын уңышлы алып барғаны өсөн;



**Азат Шакирйән улы ЯРМУЛЛИН**, “Башҡорт энциклопедияһы” ғилми нәшриәтенең тарих бүлеге мөдире – “Аманат” журналында йыл дауамында баҫылған тарихи материалдары өсөн.

Тәнзилә **ДӘҮЛӘТБИРҘИНА**

# ӨР-ЯҢЫ ЙЫЛ

Күңелдәрҙең, эй, елкенгән сағы!
Өр-яңы йыл килә беҙгә тағы!
Ҡырҙар буйлап аҡ Ҡыш елеп бара,
Ел-толпарға ҡыңғырауҙар тағып!

Һәр кемдең дә туңған тәҙрәһенә,
Тынын өрөп, биҙәк һала һалҡын.
Йылы өйҙә Яңы йылды көткән
Кешеләрҙең йөрәгендә - ялҡын!

Саҡматаштай сағып йөрәктәрен,
Бер-береһенән улар йылы ала.
Һәр кемдең дә аҡ төн аръяғында
Хәтерҙәргә һеңгән йылы ҡала.

Тылсымлы төн ике йылды бергә
Тоташтырған серле күпер кеүек.
Үткән йылдан яҡты киләсәккә
Бәхетлеләр генә үтер кеүек.

Өмөт менән кеше бәхетле ул,
Яҡты уйҙан күңел ҡанатланһын!
Хыялдай саф, изге яңылыҡтар
Килер йылда көн дә ҡабатланһын!





**Рөстәм ХӘМИТОВ,**
**Башҡортостан Республикаһы Президенты:**

*“Бөгөн донъяла ике миллион самаһы башҡорт йәшәй. Шуға күрә башҡорт теле мотлаҡ өйрәнелергә һәм һаҡланырға тейеш. Йәмғиәттә глобалләшеү шарттарында башҡорт теле шаҡтай киңерәк таралған рус һәм инглиз телдәре тарафынан үҙенә ҡарата көслө баҫым кисерә. Әммә һәр бер тел, шул иҫәптән башҡорт теле лә, уникаль тел. Был — донъя мәҙәниәте күренеше, һәм ул яҡланырға тейеш. Башҡорт теле иҫән ҡалһын өсөн уға ярҙам итергә бурыслыбыҙ, хатта яһалма рәүештә булһа ла”.*

**«Башинформ» мәғлүмәт агентлығы.**

## Мәҙәниәтле Ҡуян йылы

2011 йыл, башҡорттарҙың мөсәл иҫәбе буйынса Ҡуян йылы тип нарыҡланған йыл, республикабыҙҙа Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителә. Башҡортостанда күптән инде һәр бер йыл ниндәйҙер исем аҫтында үткәрелеп килә. Әле оҙатырға йыйынған йылыбыҙ, республикабыҙҙың суверенитет яулауының 20 йәшен билдәләп, Республика йылы тип иғлан ителгәйне. Рәсәйҙә ул, белеүебеҙсә, Уҡытыусы йылы булды. Ғөмүмән, халыҡ-ара кимәлдә танылған һәр ҙур система һәр йылды ниндәйҙер исем аҫтында үткәреүҙе йола итеп алған. Мәҫәлән, “Тюрксой” халыҡ-ара ойошмаһы быйылғы йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан итте, Бөтә донъя ҡырағай тәбиғәтте һаҡлау ойошмаһы юлбарысты һаҡлау йылын ойошторҙо, ә Рәсәй Ҡоштарҙы һаҡлау йәмғиәте Төғәрлекте һаҡлау йылын иғлан итте һ. б.

Былар барыһы ла беҙҙең һаман глобалләшә барған күп яҡлы йәмғиәтебеҙҙә ниндәйҙер бер өлкәгә айырым иғтибар талап ителгәнен күрһәтеү маҡсатында башҡарыла. Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителгән аҡ ҡуян йылында ла Башҡортостанда йәмғиәттә мәҙәнилек кимәлен үҫтереү буйынса күп эштәр башҡарылыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ. Сөнки мәҙәниәт тигән төшөнсә беҙҙең тормошобоҙҙа бик күп яҡлы һәм ифрат бай тормош булып күҙаллана, ул әҙәбиәт менән опера сәнғәтенән алып, кеше алдында үҙ-үҙеңде тота белеүгә тиклем үҙ эсенә ала. Мәҙәниәтле кеше ул – матур тәрбиәле кеше.

# Ҡотлайбыҙ һеҙҙе, йәш хәбәрселәр!

**Йылдағыса, “Аманат” журналы менән әүҙем хеҙмәттәшлек иткән уҡыусыларҙың иң-иңдәре араһынан йәш хәбәрсе исеменә лайыҡ булыусыларҙы билдәләнек. Бына кемдәр улар, “Аманат” журналының йәш хәбәрсеһе танытмаһына лайыҡтар:**

**Әлфинә НӘБИУЛЛИНА** – Бөрйән районының Нәби мәктәбе уҡыусыһы;

**Айгөл МӨХӘМӘТНУРОВА** – Аҫҡын районының Ҡарткиҫәк мәктәбе уҡыусыһы;

**Гөлназ ӘХМӘТОВА** – Бүздәк районының Хәким Филәжев исемендәге Ҡаңны-Төркәй мәктәбе уҡыусыһы;

**Айнур ИГЕЛЕКОВ** – Сибай ҡалаһының “Ирәндек” лицейы уҡыусыһы.

Йәш хәбәрселәребеҙҙе ихлас ҡотлайбыҙ, уҡыуҙарында уңыштар, тормоштарында аҡ бәхеттәр, һәм яңынан-яңы ижади үрҙәргә үрләүҙәрен теләйбеҙ!

## ҠЫШ КИЛДЕ

Ап-аҡ ҡарҙар һибә-һибә,
Буран атын уйнатып,
Ҡыш килде беҙгә ҡунаҡҡа,
Яңы йылды эйәртеп.

Бик шатланды балалар
Ҡыш килеп етеүенә.
Зарланалар каникулдың
Шундай тиҙ үтеүенә.

**Айгиз ӘҘЕҺӘМОВ.**
**Республика башҡорт**
**лицей-интернаты.**

## ҠЫШ

Килеп етте һыуыҡ ҡыш,
Матур булды инде тыш.
Тышта ап-аҡ ҡар яуа,
Беҙҙе ныҡ һоҡландыра.

Урмандарҙа ла ап-аҡ
Булған һәр ағас, ботаҡ.
Ағастың ышығына
Йәшенгән ҡуян ҡурҡаҡ.

**Таһир АЙЫТБАЕВ.**
**Учалы районының**
**Ураҙ лицейы.**

## ЯҠТЫ БАЙРАМ

Ҡыш бабай килеп етте,
Тәмле күстәнәс тотоп.
Яңы йылды ҡаршылайбыҙ
Шыршы тирәләй тороп.

Барыһы ла көтә инде
Был Яңы йыл байрамын.
Быңдай яҡты байрамдарҙы
Мин дә көтөп аламын.

**Урал ТАҺИРОВ.**
**Әбйәлил районының**
**Таҡһыр мәктәбе.**

## УҠЫТЫУСЫМ

Белем һуҡмағына тәүләп
Етәкләп алып менгән,
Белем серҙәрен өйрәткән
Уҡытыусым – бергенәм.

Күмәкләп ҡарҙа уйнаныҡ,
Еләк йыйҙыҡ урманда...
Уҡытыусым шул саҡтарҙа
Ҡурсалап торҙо янда.

Уҡытыусым, беҙгә һаман
Терәкһең һәм кәрәкһең.
Рәхмәттәрҙең иң олоһо
Һиңә һәр саҡ әләкһен.

**Ғәзизә ИЛЕМБӘТОВА.**
**Хәйбулла районының**
**Оло Әбеш ауылы.**

## ТАТЫУ ЙӘШӘЙБЕҘ

Дуҫтар менән тау эйәбеҙ,
Күңелле шыуа сана!
Күптән ҡайтырға ла ваҡыт,
Йорттарҙа уттар яна.

Юҡ, ҡайтаһы килмәй өйгә,
Тышта шундай саф һауа!
Ябалаҡлап ҡарҙар яуа,
Күңелгә үҙе дауа.

Текә тауҙан ҡолап төштө
Яҡын дуҫым Алёша,
Илнур менән Костя уны
Торғоҙорға тырыша.

Эш булһа ла, шау-гөр килеп,
Бергәләшеп эшләйбеҙ,
Төрлө милләт балалары
Дуҫ һәм татыу йәшәйбеҙ.

**Азамат ҮТӘШЕВ.**
**Сибай ҡала гимназияһы.**

## ЯҢЫ ЙЫЛ

Айыу, төлкө, бүре, ҡуян –
Кемдәр генә юҡ бында!?
Ҡыш бабай ҙа килеп еткән,
Күстәнәсе – тоғонда.

Ҡарһылыу шыршы янында
Бейей, йырлай, уйната.
Шыршы сағыу уттар менән
Төрләсә ем-ем итә.

Яңы йылдар ҡотло булһын,
Бәрәкәтле һәм имен.
Тыуыр йылдар үҙ шатлығы,
Бәхете менән килһен!

**Илүзә ТЕЛӘҮМОРАТОВА.**
**Ейәнсура районының**
**Байыш ауылы.**

## ҠЫШ БАБАЙ МЕНӘН БЕРГӘ

Яңы йыл килде беҙгә
Ҡыш бабай менән бергә.
Ҡарһылыу ҙа, бүләктәр ҙә,
Байрамы ла бар беҙҙә.

Шыршы тирәләй әйләнеп,
Төрлө йырҙар йырлайбыҙ,
Таҡмаҡ әйтеп,
шиғыр һөйләп,
Төрлө уйын уйнайбыҙ.

Бик шат беҙҙең
Ҡыш бабай ҙа,
Бүләктәрен таратыр.
Был күңелле Яңы йылдан
Һәр кем ҡыуанып ҡайтыр.

**Данил ҒИЛФАНОВ.**
**Асҡын районының**
**Табыҫҡытамаҡ ауылы.**



## ҠУСТЫМ – ҠЫШ БАЛАҺЫ

Ҡыш миҙгеле, ай-һай, яман,
Бурандарын ҡоторта.
Йә ул, ҡояшты уятып,
Сыуаҡ көндө булдырта.

Шулай, бер көн сыуаҡ булды,
Ҡустым – Ғәлимйән – тыуҙы.
Алып ҡайтыр мәле еткәс,
Яман буран ҡоторҙо.

Хәҙер бер йәш тулып килә
Минең матур ҡустыға.
Өй буйлап имгәкләп йөрөп,
Донъяны ул туҙҙыра.

**Гөлсимә ИҪӘНГИЛДИНА.**
**Хәйбулла районының**
**Иҫәнгилде ауылы.**

## ҠЫШ

Ап-аҡ ҡыш килде еремә,
Ҡар-бурандар уйнатып.
Бер ҙә
ҡурҡмайым һыуыҡтан,
Тышҡа сығам ҡыуанып.

Саңғыла йөрөп киләмен,
Һалҡын, саф һауа һулап.
Урманға барып әйләнәм,
Ҡуян эҙҙәрен ҡарап.

Ағастар ултыра ойоп,
Аҡ шәлдәрен бөркәнеп.
Ниндәй матур ҡышҡы урман!
Ҡарап торам һоҡланып.

**Линара ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Бөрйән районының**
**Яуымбай ауылы.**



## АП-АҠ

Бөтә донъя ап-аҡ,
Ҡарап торам аптырап.
Итегемә ҡар тулған,
Аяҡ китте ҡалтырап.

**Иҙел БАЙБУЛАТОВ.**
**Күмертау ҡалаһы.**

## ЯҢЫ ЙЫЛ КИЛӘ

Яңы йыл килә илгә,
Аҡ ҡуянға атланып.
Балалар Ҡыш бабайҙы
Көтә бик ныҡ шатланып.

Йәшел шыршы биҙәлгән,
Уттары ғына янмай.
Ҡарһылыу килеп ингәс тә,
Ул мең-мең төҫтә уйнай.

**Азалина МӘХИЙӘНОВА.**
**Сибай ҡалаһы,**
**Алтын касабаһы.**

# “МИНЕҢ РЕСПУБЛИКАМ” КОНКУРСЫ ТАМАМ

Беҙҙең ВЕРНИСАЖ

Башҡортостанда Республика йылы тип иғлан ителгән 2010 йылда “Аманат” журналында барған “Минең республикам” йәш рәссамдар конкурсында еңеүсе тип түбәндәге ижадсылар табылды:

**Руфина МӨХӘМӘТҠУЖИНА**, Әбйәлил районының Рәхмәт ауылы – 5-се һандағы “Тыуған яҡ” һүрәте өсөн;

**Яҙгөл ЮЛЫЕВА**, Баймаҡ районының Ярат ауылы – 4-се һандағы “Минең ауылым” һүрәте өсөн;

**Фәриҙә ШӘРИПОВА**, Өфө ҡалаһының 27-се мәктәбе – 9-сы һандағы “Һыҙылып ҡояш батҡанда” һүрәте өсөн;

**Нәфис ТАРХАНОВ**, Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты – 10-сы һандағы “Ел менән ярышып” һүрәте өсөн;

**Камила АҠБУЛАТОВА**, Сибай ҡалаһы – 11-се һандағы “Йәйләү” һүрәте өсөн;

**Ғәлимә СӨНӘҒӘТОВА**, Әбйәлил районының Яңы Балапан ауылы – 12-се һандағы “Минең республикам” һүрәте өсөн.

**Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ! Бүләктәрен көтәгеҙ!**

**Йыл китабы**

# ТЫЛСЫМЛЫ КИТАП СЫҠТЫ



Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан “Китап” нәшриәте балалар өсөн уйнай торған китап сығарҙы. Унда балалар өсөн йырҙар ноталар менән бирелгән, ноталарҙы өйрәнеү өсөн улар тураһында шиғри аңлатмалар бар. Ә иң ҡыҙығы: был китап ксилофонлы, йәғни – музыкаль китап. Уның тышында ете нотаның тауышын сығарыу өсөн махсус тимер пластинкалар ҡуйылған йәйләнмә бар. Уларҙа һәр нотаны уйнап ҡарап, яңғырашын өйрәнергә мөмкин.




Хат-Хәбәр
АМАНАТ

# Уңғандарға уңыш юлдаш



Мажара-мөғжизәләргә бай йәй, яҡты иҫтәлектәр ҡалдырып, күҙ асып йомғансы үтеп тә китте. Тышта ҡыш хакимлыҡ итһә лә, Гөлназ Солтанғужина һаман да йәй көнө булған ваҡиғаларҙы иҫенә төшөрә. Быйылғы каникулы бигерәк хәтирәләргә бай шул: синыфташтары менән бергә Һаҡмар буйына походҡа төшкәндәр, унан һуң Тоҙтүбә яҡтарына барып ҡайтҡан, уҡыуҙағы уңыштары өсөн Йоматауҙағы “Йондоҙсоҡ” лагерында ла ял иткән.

Ә иң ҡыуаныслыһы – Талҡаҫта үткән экологик слетта ҡатнашыуы. Химия һәм биология уҡытыусыһы Зөлфиә Дамир ҡыҙы Теүәлбаева етәкселегендәге команда был сарала картография-топография һәм плакат буйынса беренсе урынды яулаған. Гөлназдан тыш, слетта Таңсулпан Атанғолова, Әнүзә Теүәлбаева, Әлфинә Әҙеһәмовалар ҙа ҡатнашҡан. Бындай мөмкинлеккә тырыш ҡыҙҙар химия, биология һәм экология буйынса район олимпиадаларында уңышҡа өлгәшкән өсөн лайыҡ булған.

Гөлназ буш ваҡытта фәһемле китаптар уҡыуҙы, бәйләүҙе, тәбиғәтте фотоға төшөрөүҙе үҙ итә. “Йылайыр районы, бигерәк тә тыуған ауылым – һабыр тәбиғәте кеше күҙе күрмәгән ғәжәп матур ерҙәргә бай. Шуларҙы фотоға төшөрөп ҡалырға тырышам. Сөнки тәбиғәт бит тормош көҙгөһө,” – ти ул.

Уңған ҡыҙ мәктәптә уҙғарылған һәр ярышта, район, республика кимәлендә үткән сәсәнлек, шиғыр һөйләү бәйгеләрендә әүҙем ҡатнаша. Спортҡа ла битараф түгел: волейбол, баскетбол, өҫтәл теннисы менән мауыға.

“Атай-әсәйемде, ҡустым Артурҙы бик-бик яратам,” – ти Гөлназ. – Алла бирһә, уларҙы шатландырып, мәктәпте тик “бишле” билдәләренә тамамлап, юғары белем алып, үҙем теләгән һөнәргә эйә булырмын, тип ышанам.

Ысынлап та, хыялдарының тормошҡа ашыуына һис шик юҡ. Сөнки Гөлназ үҙ-үҙенә талапсан, ныҡышмал. Ә ундайҙарға һәр саҡ уңыш юлдаш.

**Зарина БАҒЫШАЕВА,**
**“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе,**
**БДУ студентҡаһы.**
**ҺҮРӘТТӘ: Гөлназ Солтанғужина.**

# Атайымдың юлын дауам итәсәкмен

Мин – туғыҙынсы синыф уҡыусыһы. Был йәштә күп кенә үсмерҙәр киләсәккә һөнәр һайлай. Синыфташтарым, дуҫтарым да йыш ҡына ошо хаҡта әңгәмәләшә. Тик мин генә уларҙың бәхәсендә ҡатнашмаҫҡа тырышам, сөнки мине аңламаҫтар, тип уйлайым. Минең әле бер кем дә белмәгән хыялым бар: уҡытыусы булыу. Эйе, был кемгәлер көлкө тойолор, кемдер, беҙҙең заманда уҡытыусы һөнәре абруйлы түгел, тиер. Мине, иҫ белгәндән алып, уҡытыусылар уратып алған ине: олатайым – физик, оҙаҡ йылдар директор урынбаҫары, мәктәп директоры булды; өләсәйем башланғыс синыфтарҙы уҡытты; атайым тарих уҡытыусыһы булды, әсәйем башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирә. Әйткәндәй, әсәйемә былтыр Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелде.

Бына шулай, мин бала саҡтан мәктәп атмосфераһында үҫтем: китап-дәфтәрҙәр өйөмө, кискеһен дәрескә әҙерләнеүҙәр, мәктәп хаҡында әңгәмәләр. Бәлки, шуғалыр ҙа минең алда һөнәр һайлау мәсьәләһе торманы. Хәҙер уҡытыусы булыу – хыялым ғына түгел, ә маҡсатым. Мин атайым эҙенән барырға теләйем: тарих уҡытыусыһы булғым килә. Ул был тормошта күп нәмәне эшләп өлгөрмәне – бик иртә фажиғәле рәүештә өҙөлдө уның ғүмере.

Атайым яҡшы уҡытыусы ине. Уҡыусылар тарихты дәреслектәрҙән уҡып ҡына белергә тейеш түгел, тип иҫәпләне ул. Шуға ла йыш ҡына уҡыусылары менән Башҡортостандың иҫтәлекле, тарихи урындарына экскурсия һәм походтарға йөрөнө. Ҡәҙерле кешемдең бер хыялы тормошҡа ашмай ҡалды. Ул үҙе эшләгән мәктәптә музей асыу теләге менән янды. Байтаҡ ҡына экспонаттар ҙа йыйғайнылар. Граждандар һуғышынан ҡалған ҡылыс беҙҙең өйҙә әле лә һаҡлана.

Тыуған яғымдың тарихын ныҡлап өйрәнә башлауыма шул ҡылыс сәбәпсе булды. Граждандар һуғышы ваҡытында беҙҙең яҡтарҙа бик ҡаты алыштар булған. Унда минең ҡартатайымдың олатаһы ла ҡатнашҡан. Ә был турала мин быйыл ғына, шәжәрәбеҙҙе яҡшылап өйрәнә башлағас, белдем. Ул шәжәрәне лә атайым төҙөй башлаған булған. Хәҙер минең бурысым – ошо шәжәрәне ныҡлап өйрәнеү һәм тамамлау.

Мин бәләкәй саҡта атайым әкиәт урынына легенда һәм риүәйәттәр һөйләй торғайны. Бигерәк тә башҡорт батырҙары тураһындағы легендаларҙы тыңларға ярата торғайным. Шулай итеп, ул бәләкәйҙән тыуған төйәккә, Башҡортостанға һөйөү тәрбиәләгән.

Киләсәктә атайымдың юлын дауам итеп, үҙ халҡымдың тоғро улы буласағыма ышанам.

**Айнур ИГЕЛЕКОВ,**
**“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе,**
**Сибай ҡалаһының**
**“Ирәндек” лицейы уҡыусыһы.**

# Минең ғаиләм



Мин үҙемде бик бәхетле тип һанайым. Сөнки һулар һауам, эсер һыуым, йәшәр төйәгем һәм янымда иң яҡын кешеләрем – туғандарым, атай-әсәйем, һеңлеләрем, дуҫтарым бар. Беҙ Бөрйән районының Һарғая ауылында йәшәйбеҙ. Ауылымдың тәбиғәте бик матур. Тирә-яғын ғорур тауҙар, ҡуйы урмандар уратып алған.

Ғаиләлә биш кешебеҙ: атайым, әсәйем, мин һәм ике һеңлем. Гөлназ һеңлем 3-сө синыфта уҡый, бейергә, йырларға һәм һүрәт төшөрөргә ярата. “Ҙурайғас, табип буласаҡмын,” – ти. Кесе һеңлемдең исеме Луиза. Уға – 3 йәш. Атайым – Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы хеҙмәткәре. Бик тырыш, талапсан кеше, һәр эште еренә еткереп эшләй. “Ҡалған эшкә ҡар яуа,” – тип әйтергә ярата атайым. Әсәйем һөнәре буйынса бухгалтер. Ҡул эштәренә, аш-һыуға бик оҫта. Ә мин үҙем Байназар мәктәбендә интернатта ятып уҡыйым, ял һайын ауылға ҡайтып йөрөйөм. Интернатта бик күңелле. “Ҡаурый ҡәләм” ижад түңәрәгендә шөғөлләнәм. Биология, башҡорт һәм рус теле дәрестәрен һәр саҡ көтөп алам.



Йәй көнө ғаиләбеҙ һәм туғандарыбыҙ менән тәбиғәткә сығып ял итергә яратабыҙ. Тыуған көн кеүек байрамдарҙы ла гел бергәләп үткәрәбеҙ. Беҙгә иң оҡшаған байрамдар – тыуған көн һәм Яңы йыл.

Ғаиләмде бик яратам. Киләсәктә лә матур итеп бергә-бергә йәшәргә, атай-әсәйемдең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, яҡшы итеп уҡырға теләйем.

**Резеда МӨХӘМӘТЙӘРОВА,**
**Бөрйән районының**
**Байназар мәктәбе уҡыусыһы.**

# КИЛДЕҒОЛДАР ЗАМАН



“Беҙ “Аманат”ка тоғро!

**Бөрйән районының Килдеғол (Һарағы) ауылы һуңғы йылдарға тиклем иң төпкөл яктарҙан һаналды. Хәтеремдә, Бөрйәнгә килгән һайын унда йәшәгән дуҫымды барып күрәм тип һорашһам да, унда барып етә алмаҫһың, тигән яуап ҡына ишетә торғайным. “Беҙ төпкөлдә түгел – Ерҙең үҙәгендә йәшәйбеҙ!” – тип дәлилләгән Әбйәлил районы Балапан мәктәбе уҡыусылары тураһында мин былтыр яҙғайным инде. Хәҙер бына килдеғолдарҙан хәбәр: “Беҙ тотош мәктәп менән “Аманат” журналына яҙылдыҡ!”**

Хәбәрҙең дә ниндәйе бит әле – “Скайп” программаһы аша редакция менән видеобәйләнештә! Ул программа, ғөмүмән, интернет ул яктарға нисек барып сыға алған? Ошо һорау ҡыҙыҡһындырҙы беҙҙе. Икенсе яктан, журналыбыҙҙы тотош мәктәп менән яратып алдырып йәшәүселәр ҙә республикала бер ҡул бармаҡтары менән генә һанарлыҡ. Ошо дәлилдәр беҙҙе юлға әйҙәне.


“Беҙ “Аманат” ваҡыты менән йәшәйбеҙ!” – ти мәктәп директоры Инсур Үтәбаев.

Өфөлә йылы көҙ оҙатып ҡалһа, Килдеғолда беҙҙе ҡыш ҡаршы алды. Ләкин беҙҙе көтөп торған бер ҡатлы ағас мәктәптә йылылыҡ һәм ихласлыҡ хөкөм һөрә ине. Килеп кереү менән матур итеп эшләнгән, зауыҡ менән биҙәлгән стендтарға иғтибар иттек. Өлгөрҙәр ҙә икән: “Аманат” журналы беҙҙә ҡунаҡта” стенды ла, “Аманаттар” менән тура бәйләнеш” тигән яңылыҡ менән ҡуша, мәктәп коридорын биҙәй. “Хәҙер беҙ “Аманат” ваҡыты менән йәшәйбеҙ”, – тип, беҙ бүләккә алып килгән сәғәтте мәктәп директоры Инсур Рәмил улы Үтәбаев шунда уҡ мәктәп “фойе”һына элеп тә ҡуйҙы.

Килдеғолда туғыҙ йыллыҡ мәктәп. Тарихҡа ҡараһаң, был ауыл күршеләге Әбделмәмбәт (Ҡыпсаҡ) ауылынан бүленеп сыҡҡан. Ауыл биләмәләре Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы менән сиктәш. Тарихҡа бик һаҡсыл ҡарайҙар бында, мәктәптә бай мәғлүмәт туплаған музей бар. Уның директоры, тарих уҡытыусыһы Мөнир Фәйзуллин, үҙенең тыуған яҡтары, ер-һыу атамалары

## Республика мәктәптәрендә

# МЕНӘН БЕРГӘ АТЛАЙ




**Фототүңәрәктә шөғөлләнеүселәр шөғөлдәренә ижади ҡарай!**

тураһында сәғәттәр буйы һөйләргә әҙер (был хаҡта 20-се биттә уҡығыҙ).

Мәктәптә башҡа ерҙәрҙә бик һирәк күренеш булған, тағы бер яңылыҡҡа юлыҡтыҡ – бында йәш фотоһәүәҫкәрҙәр түңәрәге эшләй икән. Уны үҙе информатика уҡытыусыһы булған мәктәп директоры Инсур Рәмил улы алып бара. Килешерһегеҙ, хәҙер һәр кеҫә телефонында портатив фотоаппарат булһа ла, уның менән ҡыҙыҡлы һәм ысын сәнғәт әҫәре булырҙай фотокадр табыу иһә оҫталыҡ һәм төшөрөү серҙәрен белеүҙе талап итә. Ошонда нисек итеп башҡорттарҙан бер генә фоторәссамдар, БР фоторәссамдар союзы ағзаһы Флүр Ғазиндың Бөрйәндән булыуын иҫкә төшөрмәйһең инде?

Килдеғол балалары һәр эштә лә әүҙем булып сыҡты. Осрашыуҙа улар "Аманат" журналына ниндәй генә һорауҙар яуҙырманы! Үҙҙәренең беҙгә әҙерләгән сюрприздары ла бар: туғыҙынсы синыф уҡыусылары, пластилин ҡурсаҡтар яһап, "Аманат"тың Азатҡа ярҙамы" тигән реклама ролигы төшөргән икән. Бына ошондай балалар ҙур ғорурлыҡ менән: "Беҙ замандан бер аҙым алға атлайбыҙ ул!" – тип әйтә алмаймы ни?

Афарин, килдеғолдар! "Аманат" ваҡыты менән йәшәһәгеҙ, һеҙҙең һәр ваҡыт иң алдынғылар рәтендә булырығыҙға иманыбыҙ камил. Сөнки беҙҙең журналыбыҙ ҙа бит һеҙҙәй иң өлгөләләрҙе эҙләй һәм башҡаларҙы ла улар рәтенә баҫырға саҡыра.

Дуҫ булайыҡ!

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**
**Илһам Әхмәҙуллин фотолары.**



**"Аманат" тураһында реклама ролигын төшөрөүселәр**



**"Аманат"тың Азатҡа ярҙамы" ролигынан күренеш.**

# МӘШҺҮР БАШҠОРТ ТАРИХСЫҺЫ, ДӘҮЛӘТ ЭШМӘКӘРЕ ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ТУҒАНДЫҢ ШӘЖӘРӘҺЕ





**Ырыуы – юрматы**
**Аймағы – тәлтим**
**Араһы – суклы-ҡай**
**Ағасы – өйәнке**
**Ҡошо – әтәлге**
**Ораны – аҡтайлаҡ**
**Тамғаһы – Ү (һәнәк)**

**“Башҡорт шәжәрәләре” (Анкара, 2009) китабынан алынды.**

# ДОНЪЯҒА ТАНЫЛҒАН ҒАЛИМ, БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ БӨЙӨК УЛЫ



*“Ҡулығыҙҙан килгән ҡәҙәр әһәмиәт бирә торған мәсьәләләрегеҙ шулдыр: дин һәм телегеҙҙе һаҡлауға ғәйрәт сарыф итеү.”*

**ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ**

**(“Башҡорт халҡына хушлашыу хаты”нан)**

1919 йылдың мартында Рәсәйҙәге беренсе милли дәүләтселек – Башҡорт Республикаһын таныуға һәм Башҡорт армияһының йәш Совет дәүләтен яҡлауҙағы өлөшө ғәйәт ҙур булыуға ҡарамаҫтан, бер йылдан, йәғни үҙенең 1920 йылдың 19 майындағы декреты (указы) менән Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләй. Быны менән һис тә килешә алмаған Зәки Вәлиди Советтарға ҡаршы көрәште Төркостанда дауам итергә ҡарар итә. Үҙенең көрәштәштәре, Башҡортостан хөкүмәте – Башревком ағзаларына ла милли-азатлыҡ көрәшен дауам итеү өсөн Төркостанға (Урта Азияға) китергә кәңәш бирә.

Зәки Вәлиди өс йыл тирәһе Төркостанда большевиктарға ҡаршы көрәшә. Бында уның етәкселегендә Төркостан милли берлеге ойоштороla. Ул үҙ аллы Төркостан дәүләтен ойоштороу идеяһы менән янып йөрөй. Әммә төрки халыҡтарының тарҡаулығы арҡаһында Төркостандағы милли хәрәкәт тә уңышһыҙлыҡҡа осрай.

1923 йылда Зәки Вәлиди яҡын дуҫы Фәтхелкадир Сөләймәнов менән Иранға сыға, артабан Төркиәгә килә. 1924 йылда Германияла йәшәй. 1925 йылдың июнендә Төркиә гражданлығы алып, Истанбул ҡалаһына килеп төпләнә. 1932 йылға тиклем Төркиәнең Мәғариф министрлығында эшләй, бер үк ваҡытта Истанбул университетында профессор дәрәжәһендә уҡыта.

Милли-азатлыҡ хәрәкәте тамамланғас, Вәлиди бөтөн булмышы менән ғилем донъяһына сума. 1932-1939 йылдарҙа Германияла йәшәй. Бонн университетында докторлыҡ дәрәжәһенә диссертация яҡлай. 1923 йылда Иранда Мәшхәд ҡалаһының китапханаһында тапҡан Ибн Фаҙландың Иҙел Булғарстанына сәйәхәте тураһындағы юлъяҙмаһын тәржемә итеп, 1939 йылда немец телендә баҫтырып сығара.

1939 йылда яңынан Төркиәгә килеп төпләнә. Үҙенең вафатына тиклем Истанбул университетында эшләй. 1953 йылда университет янында Ислам тикшеренеүҙәре институтын ойоштороп, шуға етәкселек итә. Шәрҡиәтсе, тарихсы Зәки Вәлидиҙең исеме донъяға танылa.

Ҡыҙы Иҫәнбикә Туған һөйләүенсә, Әхмәтзәки Вәлиди ғүмере буйы, туған илен һағынып, “Илсе Ғайса” йырын йырлар булған. Үҙе ҡайта алмаһа ла, Советтар Союзы тарҡалғас, уның данлы исеме халҡыбыҙға ҡайтты. Быйыл Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы Төрксой ойошмаһы 2010 йылды Зәки Вәлиди йылы тип иғлан итте. Истанбул ҡалаһында бер паркка уның исеме бирелде. Шулай уҡ баш ҡалабыҙ Өфөнөң бер урамы һәм дә Үзбәкстандың баш ҡалаһы Ташкенттың үҙәк урамдарының береһе бөйөк милләттәшебеҙҙең исемен йөрөтә. Санкт-Петербургтағы Шәреҡ университетында Вәлидигә һәйкәл ҡуйылды. Төрлө дәүләттәрҙә Зәки Вәлиди уҡыуҙары һәм башҡа ғилми конференциялар уҙғарылып тора.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең исеме һәр бер башҡорт өсөн һынмаҫ рух һәм милләткә булған көслө һөйөү символы булып тора.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**“Башҡорт энциклопедияһы” ғилми нәшриәтенең тарих бүлеге мөдире.**

**Константин ПАУСТОВСКИЙ**

# ҠУЯН ТӘПӘЙҘӘРЕ

**Хикәйә**



Ваня яуап бирмәне. Ул соланға сыҡты, күҙҙәрен сылтлатып, танауын мышҡылдатты ла, өй бүрәнәһенә бите менән терәлде. Стена буйлап күҙ йәштәре ағып китте. Ҡуян майлы фуфайка эсендә дер-дер ҡалтырана ине.

– Һиңә ни булды, малай? – тип һораны унан ветеринарға бер-ҙән-бер кәзәһен етәкләп килтергән йомшаҡ күңелле Анисья әбей. – Нишләп һеҙ икәүләшеп тороп балауыҙ һығаһығыҙ? Берәй нәмә булдымы әллә?

– Янған ул, олатайымдың ҡуяны, – тине Ваня шым ғына. – Урман янғынында тәпәйҙәрен өткән, йөрөй алмай. Ана, ҡара, үлеп бара.

– Үлмәç, бәләкәсем, – тип йыуатырға маташты малайҙы Анисья әбей. – Әйт олатайыңа: әгәр ысынлап та йән эйәһен һауыҡтырырға уйлай икән, уны ҡалаға, Карл Петровичҡа алып барһын.

Беҙҙең ауылдың ветеринарына Уржен күленән Ваня Малявин, иçке һәм йомшаҡ фуфайкаға урап, йылыҡас ҡына, бәләкәс кенә ҡуян алып килде. Ҡуян илай, ҡыҙарған күҙҙәренән өҙләкһеҙ йәш субырлай.

– Иçәрләндеңме әллә!? – тип ҡысҡырҙы уға ветеринар. – Тиҙҙән миңә сысҡандар ҙа ташый башларһың, хәстрүш!

– Ә һеҙ лауылдамағыҙ, был ҡуян – үҙенә башҡа, – тип шым ғына өндәште Ваня, – уны олатайым ебәрҙе, дауаларға ҡушты.

– Нимәнән дауаларға һуң?

– Аяҡтары янған уның.

Ветеринар малайҙы ярынынан тотоп ишеккә табан борҙо ла, арҡаһынан этеп ебәреп, артынан ҡысҡырып ҡалды:

– Бар, бар, юлыңда бул! Дауалай белмәйем мин уларҙы. Һуған менән ҡыҙҙырып бир, олатайың кинәнеп ашар.

Ваня күҙҙәрен һөрттө лә урмандар аша өйөнә, Уржен күленә ҡайтып китте. Ҡыҙған ҡомдан яланаяҡ, атлап түгел, йүгереп барҙы ул. Яңыраҡ ҡына күл янынан урман янғыны үткәйне. Тирә-яҡты янған һөрөм, ҡәнәфер еçе тултырған. Ул буш ялан урталарында өйкөм-өйкөм булып үçә.

Ҡуян ыңғырашты. Ваня йомшаҡ, йәш япраҡтар өҙөп алды ла, уларҙы ҡарағай төбөнә түшәп, ҡуянды өçтөнә һалды һәм тағатты. Ҡуян япраҡтарға ҡарап ҡуйҙы, уларға мороно менән төртөлдө лә, тынып ҡалды.

– Һин нимә, һороҡай, – тип шым ғына өндәште Ваня уға, – ашап алыр инең.

Ҡуян ҡыймылдаманы.

– Ашар инең, – тип ҡабатланы Ваня, тауышы ҡалтырап сыҡты. – Бәлки, һыу эскең киләлер?

Ҡуян йыртыҡ ҡолағын ҡыймылдатып алды, ләкин өндәшмәне, күҙҙәрен йомдо. Ваня уны күтәреп алды ла тағы йүгерҙе – тиҙерәк күлгә етеп, һыу эсереп ҡарарға кәрәк ине.

Ул йәйҙә урмандарға кеше быҒаса ишетмәгән-күрмәгән эҫелек килде. Иртәнсәк болоттар сыға ла, төшкә табан күккә үрләй һәм тиҙ арала ҡайҙалыр китеп юғала ла ҡуя. Томра, ҡоро ел ике аҙна буйы туктауһыҙ тирә-йүндә өттө. Ҡарағайҙарҙың олоно буйлап иреп аҡкан сайыр гәрәбә таштар барлыҡка килтерҙе.

Иртәгәһенә олатай таҙа сылғау урап, яңы сабаталарын кейҙе, юлға бер телем икмәк алып, таяҡ таянып, ҡалаға юлланды. Ҡуянды күтәргән Ваня уның артынан эйәрҙе. Бахырҡай бөтөнләй шымтайып ҡалған, тик һирәк-һаяҡ ҡалтырап ҡына ҡуя.

Ҡаулан ел ҡала өҫтөндә ондай ваҡ, аҡһыл туҙан өйөрә. Тауыҡ йөндәре, ҡоро япраҡтар, һалам киҫәктәре ҡуша өйөрөлә. Ситтән ҡарағанда, ҡала буйлап талғын ғына янғын йөрөгән һымаҡ. Баҙар майҙаны буп-буш, һыуалғыс будка янында извозчик аттар әлһерәп тора, уларҙың баштарына һаламдан эшләпә яһап кейҙерелгән. Ҡарт суҡынып алды.

– Атмы был, кәләшме – шайтан белһен, – тине лә, төкөрөп ҡуйҙы ул.

Улар төрлө кешеләрҙән бик оҙаҡ Карл Петрович тураһында һорашып йөрөнө, тик берәһе асыҡ әйтә алманы. Дарыуханаға инделәр. Ҡыҫҡа аҡ халат, пенсне күҙлек кейгән йыуан картлас, үтенесте ишеткәс, асыулы ғына яурындарын һикертеп ҡуйҙы:

– Бик ҡыҙыҡ был! Карл Петрович Корш – балалар табибы – өс йыллап инде бына пациенттар ҡабул итеүҙән туҡтаны. Ул һеҙгә нимәгә кәрәк?

Ҡарт тартынып ҡына уға ҡуян тураһында һөйләп бирҙе.

– Бик ҡыҙыҡ был! – тип ҡабатланы аптекарь. – Беҙҙең ҡалабыҙға үтә сәйер кешеләр килеп сыҡҡылай. Бик ҡыҙыҡ был!

Ул ҡыҙыу ғына итеп күҙлеген һалды, ҡартҡа текләп ҡараны. Уныһы өндәшмәне, тапанып тик торҙо. Аптекарь ҙа шымды. Тынлыҡ оҙаҡ дауам итте, ауырая башланы.

– Почта урамы, өс! – тип кинәт ҡысҡырҙы ла аптекарь, ҡалын китапты шапылдатып япты. – Өс!

Ваня менән олатаһы Почта урамына мәленә барып еттеләр: Ока аръяғынан йәшенле болот килеп сыҡҡайны. Ялҡау ғына күкрәү, йоҡолағы бәһлеүән һымаҡ, әкрен генә ерҙе һелкеткеләп ала. Йылға өҫтөнән шаҙра тулҡындар йүгереп үтте. Өнһөҙ ялағайҙар йылға аръяғындағы туғайҙарҙа күк йөҙөн оҙон сатраштар булып телгеләй, унда улар тоҡандырған кәбән дә яна башланы. Туҙанлы юлды эре ямғыр тамсылары бәргесләй. Ул тиҙҙән Ай өҫтөнә оҡшап ҡалды: һәр тамсы туҙан өҫтөндә кескәй кратер ҡалдыра.

Карл Петрович роялдә һағышлы һәм талғын көй уйнап ултырғанда, тәҙрәнән көрәк һаҡаллы ҡарт ҡараны. Бер минуттан хужа асыулана башлағайны инде.

– Мин ветеринар түгел, – тине лә ул рояль ҡапҡасын шаҡылдатып япты. Шул мәлдә генә туғайҙар буйлап йәшен гөрһөлдәп үтте. – Мин ғүмер буйы ҡуяндарҙы түгел, ә балаларҙы дауаланым.

– Ҡуян ни, бала ни – бер йән инде, – тип мығырҙаны ҡарт. – Бер йән улар! Дауала инде – ит изгелек! Беҙҙең ветеринарҙың ҡулынан килмәй был эш. Ул малды сала ғына белә. Был ҡуянды мин ҡотҡарыусым тип әйтә алам: уға ғүмерем буйы бурыслы булып, ҡәҙерләргә тейешмен, ә һин... ташла, имеш!..

Тағы бер минуттан сал сәсле ҡарт Карл Петрович икенсе ҡарттың тотлоға-тотлоға һөйләгәнен тулҡынланып тыңлап ултыра ине.

Ахырҙа Карл Петрович ҡуянды дауаларға риза булды. Ҡарт иртән күленә ҡайтып китте, ә Ваняны ҡуянды ҡарап торорға ҡалдырҙы. Тағы бер көндән барлыҡ Почта урамы Карл Петровичтың яралы ҡуянды дауалауы, ә унының урман янғынында ниндәйҙер ҡартты ҡотҡарыуы хаҡында белә ине инде. Тағы ике көндән был турала тотош ҡала һөйләй башланы. Ә өсөнсө көндә Карл Петровичтың ишеген фетр эшләпә кейгән йәш кеше ҡаҡты, үҙен Мәскәү гәзитенең хәбәрсеһе тип таныштырҙы һәм ҡуян тураһында һөйләүен үтенде.

Ҡуян һауыҡты. Ваня уны шул уҡ йомшаҡ фуфайкаһына ураны ла алып ҡайтып китте. Тиҙҙән ҡуян тураһында тарих та онотолдо, тик бер Мәскәү профессоры ғына оҙаҡ әле, ҡуянды үҙенә һатыуын һорап, бабайҙы ҡаңғыртты. Хатта яуап яҙыр өсөн конверттар ҙа һалып торҙо. Ҡарт, әйтеп тороп, Ванянан ул профессорға хат яҙҙырҙы:

“Ҡуян һатылмай. Тере йән эйәһе ул, әйҙә, иректә йәшәһен. Ихтирам менән – Ларион Малявин”.



...Быйыл көҙ миңә Уржен күле буйында Ларион бабайҙа булырға, йоҡлап сығырға тура килде. Һалҡын һыуҙа боҙ һымаҡ йондоҙҙар сағыла ине. Ҡоро ҡамыш ҡыштырлай. Өшөгән

өйрәктәр әрәмәлектә быжҡылдаша.

Ҡарт йоҡлай алмай, мейес алдында йыртыҡ ауҙарҙы йүнәтеп ултыра. Аҙаҡ ул самауыр ҡуйып ебәрҙе – тәҙрә быялалары парланып китте һәм тыштағы йондоҙҙар алсаҡ нөктәләрҙән тоноҡ шарҙарға әйләнде. Ишек алдында Мурзик өрә. Ул төнгө тынлыҡҡа һикерә лә кире сигенә – октябрь төнө менән алышып маташа шулай. Ҡуян соланда йоҡлап ята, йоҡоһонда артҡы аяҡтары менән серек иҙәнде сапсып алғылай.

Ҡабаланмай ғына тыуып килгән таңды сабыр ғына көтөп, сәй эсеп ултырғанда, ҡарт миңә ҡуяндың тарихын бәйән итте.

Августа ул күлдең төньяғына һунарға сыға. Ҡоро урман тоҡанырға әҙер торған дарыны хәтерләтә ул саҡ. Бер ҡуян ғына осрай ҡартҡа. Иҫке генә, тимерсыбыҡ менән бәйләп ҡоршалған мылтыҡтан атып, ҡарт уға тейҙерә алмай, ҡуян ҡасып китә. Ары китә был. Тик ҡапыл һиҫкәнеп туктап ҡала: ҡайҙандыр – Дегәнәк ауылы яғынан, шикелле – төтөн еҫе килә!.. Ел күтәрелә башлай, төтөн көсәйә, томан һымаҡ урман буйлап йәйелә бара. Тын алыуы ла ауырлаша.

Урманда янғын сығыуын, уттың туп-тура үҙенә табан килеүен аңлай ҡарт. Ел көслө дауылға әйләнә. Ул янғынды урман буйлап ҡот осҡос тиҙлектә ҡыуа. Ҡарт үҙе әйтеүенсә, хатта поезд да бындай янғындан ҡасып ҡотола алмаҫ ине. Һәм дөрөҫ тә: янғын ваҡытында ут урманда сәғәтенә утыҙ саҡырым тиҙлектә хәрәкәт итә бит.

Тумарлыҡта абына-һөрөнә, төтөнгә сәсәй-сәсәй, ҡарт ситкә ташлана, артынан шатыр-шотор урман янғыны ҡыуа килә. Әжәл бына-бына ҡыуып етеп, үңәсенән эләктерәм тигәндә, ҡарттың аяҡ аҫтынан ғына бер ҡуян сығып ҡаса. Ул шәп саба алмай, артҡы аяҡтарын һөйрәп кенә йүгерә. Аҙаҡтан ғына аңлашылыуынса, улар янған булған икән.

Ҡарт был ҡуянға туғанын осратҡандай ҡыуана. Ғүмер буйы урманда йәшәп, ул шуны яҡшы белә: йәнлектәр янғындың ҡайҙан килгәнен яҡшы һиҙә һәм уттан гел ҡасып ҡотола белә. Ут тотошлай уратып алған осраҡтарҙа ғына һәләк була улар. Ҡарт ҡуяндың артынан йүгерә. Үҙе саба, үҙе: “Ул тиклем ашыҡма, ҡәҙерлем, көтә бир әҙерәк!..” – тип илай-илай ялбара.

Ҡуян ҡартты янғындан алып сыға. Урмандан күл ярына килеп сыҡҡас, икеһе лә хәлдән тайып йығыла. Ҡарт ҡуянды өйөнә алып ҡайтып китә. Уның артҡы тәпәйҙәре һәм ҡорһағы янған икән. Аҙаҡтан ҡарт уны һауыҡтыра һәм үҙендә ҡалдыра.

– Эйе, – тип самауырға асыу менән ҡарап ҡуйҙы ҡарт, әйтерһең дә, әле генә ул һөйләгән бәләләрҙә самауырҙың ғәйебе бар. – Ә теге ҡуян алдында минең гонаһ ҙур булған икән, дуҫ кеше.

– Һинең ни ғәйебең бар һуң?

– Ә һин сыҡ та, мине ҡотҡарыусыға ҡарап ҡара. Ал әле фонарҙе.



Өҫтәлдә торған шәмде алып, мин соланға сыҡтым. Ҡуян йоҡлай ине. Мин уның өҫтөнә эйелә биреп, яҡтылыҡты яҡынайттым. Ҡуяндың бер ҡолағы йыртыҡ ине. Шул саҡ барыһы ла аңлашылды миңә.

**Руссанан**
**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ**
**тәржемәһе.**

Беҙҙең ҙур урман аша оло юл һалалар. Әлегә уның өсөн киң итеп урманды ҡырҡып ҡына сыҡтылар. Ул һыҙат буйлап ҡарауы күңелле: ике яҡлап йәшел урман стенаһы тора һәм зәңгәр күк кенә шундай ихлас ялтырай. Ҡырҡҡан саҡта ҙур ағас олондарын ҡайҙалыр ташып торҙолар, ваҡтарын һәм ботаҡтарҙы иһә бейек итеп өйә барҙылар. Уларын да фабриканы йылытыр өсөн алырға уйлағайнылар ҙа, әммә ҡулдары етмәне, ул сыбыҡ-сатыр өйөмдәре ҡышларға ятып ҡалды.

Көҙөн һунарсылар зарлана башланы, йәнәһе, быйыл ҡуяндар юҡҡа сыҡҡан! Кемдер был хәлде урманды ҡырҡыу менән дә бәйләне, имеш, тауыштан ҡурҡып ҡасҡан ҡуяндар. Тәүге ҡар яуып, ундағы эҙҙәр буйлап урман китабын уҡырға мөмкинлек тыуғас, миңә эҙәрмән Родионыч килде:

– Күк сабата тотошлайы менән сатыр аҫтында ята…

Родионыч, башҡа һунарсыларҙан айырмалы рәүештә, ҡуянды “ҡылый шайтан” тимәй, ә һәр ваҡыт “күк сабата” тип атай. Бында аптырарға ла кәрәкмәйҙер: ҡуян шайтанға ла сабатаға һымаҡ ҡына оҡшаған, ә сабата күк булмай ҙа, тиһәләр иһә – шайтандың да ҡылыйы буламы ни?

Сатыр өйөмдәре аҫтында йәшәгән ҡуяндар тураһында хәбәр беҙҙең кескәй ҡаласыҡты тиҙ әйләнеп сыҡты. Ял көнөндә Родионыч етәкселегендәге һунарсылар минең өйгә йыйылды.

Иртә менән беҙ эттәрһеҙ генә һунарға сыҡтыҡ. Сөнки Родионыч барҙа ҡуян ҡыуырға эттең кәрәге лә юҡ ул. Төлкө эҙен ҡуяндыҡынан айырырлыҡ булып яҡтырғас, беҙ

**Михаил ПРИШВИН**

# КҮК САБАТА

**Хикәйә**



бер ҡуян юлын таптыҡ һәм шуның буйлап киттек. Ул беҙҙе өй бейеклегендә өйөлгән сатыр өйөмөнә алып килде. Ҡуян шуның эсендә ятырға тейеш, тип, беҙ сүмәләне әйләндереп баҫтыҡ.

– Башла, – тинек беҙ Родионычҡа.

– Сыҡ унан, күк сабата! – тип ҡысҡырҙы ла ул оҙон ҡолғаны өйөм эсенә тыҡты.

Тик ҡуян килеп сыҡманы. Родионыч баҙап ҡалды. Ул тағы ла өйөмдө ентекләп әйләнеп ҡарап сыҡты – йәнлектең сыҡҡан эҙҙәре күренмәй.

– Ошонда ул, – тине ул ышаныслы итеп. – Урындарығыҙға баҫығыҙ, егеттәр, әҙерләнегеҙ, бында ул, бында.

– Әйҙә! – тип ҡысҡырҙыҡ беҙ.

– Сыҡ унан, күк сабата! – тип тағы ҡысҡырҙы ла Родионыч сатыр өйөмөнә шундай оҙон ҡолғаны тыҡты – уның осо теге яҡтан килеп сыҡты хатта.

Юҡ, һаман юҡ – ҡуян күренмәй.

Беҙҙең ҡарт эҙәрмән һунарсы менән дә быңдай хәлдең ғүмерҙә булғаны юҡтыр, ахыры: уның аптырауы йөҙөнә яҙылды. Беҙ ҙә тынып ҡалдыҡ, һәр кем үҙ фаразын ҡора, тегеләй-былай ҡаранып, йөрөштөрә башланы, шулай итеп эргә-тирәләге эҙҙәрҙе тапап бөтөрҙөк. Аҡыллы ҡуянды хәҙер эҙе буйынса табыу мөмкин түгел ине.

Ҡапыл Родионычтың йөҙө балҡып китте, ул ситкәрәк китеп, түңгәккә ултырҙы ла, тәмәке тоҡандырып, шым ғына мине саҡырып алды. Башҡаларға һиҙҙермәй генә уның янына барып торҙом. Ул миңә сатыр өйөмөнөң иң түбәһенә, башында ҡар бөрке ятҡан тирәгә күрһәтте:

– Ҡара, күк сабата беҙҙе нисек һемәйткән.

Ап-аҡ ҡарҙа мин ике ҡара нөктәне – ҡуяндың күҙҙәрен һәм тағы ике ҡара тап – ҡолаҡ остарын тиҙ генә абайлай алманым әле. Башы ғына һерәйеп тора икән, һунарсылар артынан тегеләй-былай әйләнеп йөрөй...

Мылтығымды күтәрһәм, был хәйләкәр ҡуяндың ғүмере шунда уҡ өҙөләр ине. Тик миңә ул йәл булып китте: беҙгә башҡа сатырҙар аҫтында ҡалған иҫәрерәктәре етмәгәнме ни?

Родионыч мине һүҙһеҙ аңланы. Ул ҡар йомарлап алды ла, һунарсыларҙың теге яҡта өйкөлөшкәнен көтөп алып, сатыр башына елгәрҙе.

Беҙҙең ябай ғына ҡуяныбыҙ, сатыр өҫтөнә һикереп сығып, бейеккә һикерҙе лә, күк йөҙө фонында ҡая башындағы ҙур ғифриттәй күренеп, аҫҡа осто!

Һунарсылар ни эшләне һуң? Уларҙың өҫтөнә бит күктән ҡуян килеп төштө! Барыһы ла мылтыҡтарына йәбеште. Тик, һәр ҡайһыһы беренсе атырға тырышҡанлыҡтан, береһе лә төҙәп торманы – ҡуяныбыҙ ҡыуаҡтарға ҡасты.

– Бына һиңә күк сабата! – тип һоҡланып ҡысҡырҙы уның артынан Родионыч. Ул арала һунарсылар, ҡыуаҡтар яғына ҡарап, тағы берәр гөпөлдәтергә өлгөрҙөләр.

– Үлтерҙек! – тип шат һөрәнләне бер йәшерәге.

Тик шул ваҡыт, уға яуап һымаҡ булып, алыҫтағы ҡыуаҡ артында ҡойроҡ ялпылдап ҡалды: һунарсылар уны “сәскә” тип атай.

Күк сабата үҙен аулаусы һунарсыларға шулай “сәскәһен” генә болғаны.

**Руссанан**
**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ**
**тәржемәһе.**

# РӘХИМЙӘН ТАШЫ



**Эйәрле ат аша дәүү ташты ғәйрәтләнеп ташлаған батыр тураһында легенданы мин бәләкәйҙән ишетеп үҫтем. Һуңынан шуны ла белдем: башҡорттарҙа таш күтәреү борон-борондан үҙе бер матур йола, таһыллыҡ, көс-ғәйрәт һәм батырлыҡ символы булған икән. Эпостан белеүебеҙсә, Урал батыр ҙа был изге йоланы үтәгән:**

*...Шунан алып ҡулына*
*Ташты атҡан һауаға...*



"Ҡамыр батыр" башҡорт халыҡ әкиәтендә лә: "Ҡыҙ батша өй ҙурлығы бер ташты ике ҡуллап баш осона саҡ-саҡ күтәргән дә кире урынына ҡуйған. Ә Ҡамыр батыр ул ташты етеҙ генә күтәреп алып, тау аҫтына уҡ ырғытып ебәргән," – тиелә.

Беҙҙең Килдеғол урта мәктәбе янындағы тыуған төйәкте өйрәнеү музейына урынлаштырылған Рәхимйән ташы ла төрлө легендаларҙың килеп сығыуына сәбәпсе. Әбйәлилдәге һабантуйҙарҙың береһендә таш күтәреү ярышы ла булған икән. "Ниңә таш күтәртәһегеҙ?" – тигәстәре: "Бөрйәндәр шулай итә," – тигәндәр, ти. Был матур йола башҡорттоң милли ярышы төҫөн алып, тотош республика күләмендә лә таралып китһә, бик мәслихәт булыр ине. Әкиәттәрҙә һәм сал тарих биттәрендә тасуирланған башҡортомдоң бәһлеүәнлек символын яңыса бөгөнгә ҡайтарыу тигән һүҙ ул.

Рәхимйән ташы райондаштарыбыҙға бик яҡшы таныш. Йыл һайын район һабантуйында был таштың оҡшашын күтәреп, бәһлеүән ир-егеттәребеҙ асыҡланып тора. Ә ысын таш үҙе 1994 йылда Байназарҙың Ҡара айғыр яланында уҙғарылған Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы йыйынында тәүге тапҡыр ярыш майҙанына сығарылды һәм шуныһы ғәжәп хәл булды: бик күп ир-егеттәр тырыштырып ҡараһа ла, беренселекте һәм приз һарығын Рәхимйәндең нәҫеленән булған Һарғая ауылынан Салауат Килдейәров алды.

Килдеғол ауылында торған 1798 йылғы Иғасурин Яхъяның улы Муллағәләмдең өс улынан – Шәмсетдин, Хөбөтдин һәм Мәхмүтдиндән таралған беҙҙәге Яхиндар. Рәхимйән Шәмсетдиндең өс улының уртансыһы була.

1950 йылда сайыр мастеры булып эш башлап, һарағынан Һарғаяға эшкә йөрөгәнендә, ауылдан өс саҡырым тирәһе ерҙә ул йоморо ғына ҙур аҡ таш күреп ҡала. Ярым ергә һеңгән ташты урынынан ҡумшытып, юл ситенә сығарып һала. Кис, эштән ҡайтышлай, йәнә атынан төшә – таныш ташты күтәреп, юлдың бирге яғына килтереп бәрә...

Рәхимйән бер көндө ағай-энеләре менән һарғая ауылына китеп бара. Таш тапҡырына килеп еткәс, әйтә был: "Әйҙәгеҙ, ағай-эне, бынауында туҡтап, ял итеп китәйек", – ти. Егеттәр аттарынан төшә, тәмәке тоҡандырып, ергә сүгәләйҙәр. Рәхимйән: "Ҡалай йәтеш таш бынауы, күтәреп ҡарайыҡмы әллә?" – тигән була. "Һи-и, уны ғына булдырабыҙ инде!" – тиешә тегеләр. Береһе күтәрергә маташа, икенсеһе, өсөнсөһө – булмай. Рәхимйән ташты ерҙән һелкетә тартып ала ла, башы осона күтәреп, янында торған ат аша әллә ҡайҙа уҡ ырғытып ебәрә. Егеттәр "ах!" итә.

Рәхимйәндең йәштәше, 1930 йылғы Нух ағай Көмөшбаев, миңә таш ятҡан урынды күрһәтте. 1993 йылдың 25 май көнөндә ташты алып ҡайтыуыбыҙ хәтеремдә. Өсәүләп ташты трактор арбаһына күтәреп һалдыҡ. Ауылға ингәс, бригада келәтенә алып барып, үлсәттек. Рәхимйәндең ҡулында уйынсыҡтай ғына уйнаған таш 97 кило ла 600 грамм тартты!

**Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН,**
**Бөрйән районы**
**Килдеғол мәктәбенең**
**тарих уҡытыусыһы.**

## Конкурс тамам. Конкурс дауам итә!

Вәғәҙә итеүебеҙсә, беҙ "Төйәгем тарихы" конкурсына йомғаҡ яһайбыҙ. 2010 йылда журналда сыҡҡан материалдар буйынса, тыуған яғының ер-һыу атамалары тарихын яҙып ебәреүселәр араһында еңеүселәр тип түбәндәгеләр билдәләнде:

**Айгөл ЯХИНА,** Әбйәлил районының Ырыҫҡужа ауылы;

**Гөлшат ЙЫҺАНШИНА,** Асҡын районының Упканкүл ауылы;

**Ынйыгөл ИШБУЛАТОВА,** Ейәнсура районының Үтәғол ауылы.

Уларға "Аманат" журналының Маҡтау билдәләре һәм автографлы китаптар ебәреләсәк.

Тыуған яҡ тарихын өйрәнеү балалар араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыуын иҫәпкә алып, беҙ "Төйәгем тарихы" конкурсын киләһе йыл да дауам итергә булдыҡ. Шарттары ла шул уҡ ҡала: тыуған яғығыҙҙың ер-һыу атамаларының килеп сығыу тарихын, уларға бәйле легендалар тураһында беҙгә яҙып ебәрегеҙ, материалдарығыҙҙы фотолар, һүрәттәр менән биҙәгеҙ.

Уңыштар һеҙгә!




АМАНАТ
2011



# БАШҠОРТОСТАНДА “ҠУЯН” ИСЕМДӘРЕ

Республикабыҙҙың ер-һыу атамаларында “куян” тамырынан яһалған исемдәр йыш осрай. Ауылдарҙан – Иглин (тәүге исеме Убежище), Ҡалтасы (Мәрен), Бөрйән (Нәби), Күгәрсен, Краснокама районларындағы Ҡуян ауылдарын атарға мөмкин. Ҡыйғы районында Ҡуянай, Ҡариҙел районында Ҡуянсы тигән ауылдар бар. Баймаҡ районындағы ауыл иһә Ҡуянтау исемен йөрөтә. Ауыл исемдәренең үҙҙәре ултырған йылға һәм тау атамаларынан сығыуын иҫәпкә алғанда, улар янындағы йылға һәм тауҙарҙа ла “ҡуянлы” атамалар барҙыр, тип фаразларға мөмкин.

Көйөргәҙе районында Ҡуянҡул, Белорет районында Ҡуянтау тигән йылғалар аға. Тауҙарҙан Мәсетле районында Ҡуянауыл тауы, Исхак-Ҡуян тауы, Баҡалы, Учалы һәм Көйөргәҙе райондарында Ҡуянтау тауҙары ҡалҡҡан.

Иң мәғрүре, әлбиттә, Ҡуянтау исемен йөрөткән Ямантауҙың “игеҙәк” түбәһе. Уны Бәләкәй Ямантау тип тә атайҙар. Йә болот менән ҡапланып, йә аҡ таштарын ҡояшта ялтыратып ятҡан был түбә 1519 метрға күккә ашҡан.



**ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Оло Ямантауҙың һул яғындағы “кустыһы” – “Ҡуянтау”; Бөрйән районының Ҡуян (Нәби) ауылы.**

# АМАНАТ

**Ғинуар — Һыуығай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
| 31 | | | | | | |

**Февраль — Шаҡай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | | | | | | |

**Май — Һабанай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |

**Июнь — Һөтай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | | | |

**Сентябрь — Һарысай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | | |

**Октябрь — Ҡырпағай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
| 31 | | | | | | |



## Александр




**Март — Буранай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |

**Апрель — Алағарай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | |

**Июль — Майай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 |

**Август — Урағай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |

**Ноябрь — Ҡарасай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | | | | |

**Декабрь — Аҡъюлай**

| Дш | Шш | Шр | Кс | Йм | Шб | Йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | |







## “Ламброджини Мурселаго”



Был машина үҙенең икенсе исемен – “Янычар” – төрөктәрҙең Осман империяһындағы йәйәүле ғәскәр атамаһынан алған. Италияның Болонья ҡалаһы янында төҙөлгән был завод башта тракторҙар сығара, унан спорт машиналары ла етештереүгә күсә.

“Ауди” концернына ингән был компания – донъяла иң ҡиммәтле спорт машиналары сығарыусы һанала. Рәсәйҙә, мәҫәлән, бындай машиналы кешеләрҙе бармаҡ менән генә һанарлыҡ, хаҡы 12 миллион һумдан аша.

Самолет тиҙлегендә (сәғәтенә 350 саҡырым) йөрөүсе автомобиль, бик тәпәш ултырыуы сәбәпле, яҡшы юлдар ҙа талап итә. Тышҡы ҡиәфәте буйынса ла уны башҡа бер машина менән дә бутарлыҡ түгел. Ысынлап та, уның эсендә ултырған кеше үҙен самолетта ултыра тип уйлауы ла ихтималдыр.

# «Аманат» коллекцияһы

## “Гепард – 3,9” фрегаты



Рәсәй классификацияһында “Фрегат” тигән төшөнсәгә һаҡсы (сторожевой), һәм оҙатыусы (конвой) караптары тура килә.

Татарстандың Зеленодольск ҡалаһында сығарылған “Гепард” класындағы хәрби караптар диңгеҙ ярҙары янындағы һыуҙарҙы һаҡлау, йөк караптарын һаҡлап һәм оҙатып йөрөү бурысын үтәй.

Оҙонлоғо – 102, киңлеге – 13, бейеклеге һыу өҫтөнән 5,3 метр булған карап сәғәтенә 1,8 узел (50 саҡырым) тиҙлектә йөҙә. 98 кешелек экипажы һыуҙа 15 тәүлек буйына үҙаллы йәшәй ала. Карап төрлө дошман караптарына ҡаршы, һыу аҫты кәмәләренә ҡаршы, һауа көстәренә ҡаршы пушка, зениткалар, ракеталар һәм бомбалар менән ҡоралланған, вертолет майҙансығы бар. Быйыл бындай ике карапты Вьетнам да һатып алды.





Яңы йыл ҡотлауҙары

## ҒАИЛӘГӘ



Бәхет теләп күктә йондоҙ ҡелә,
Атыла ла, ҡуна шыршыға.
Ҡар-бурандар булып ваҡыт елә,
Сәғәт теле булып ашыға...

Өйөгөҙгә ул ҡот булып инһен,
Муллыҡ, шатлыҡ булып биҙәһен!
Яңы йыл һәм яңы уңыш менән
Ҡотлап һеҙҙе:
Ҡыш бабай һәм мин.

## ҺӨЙГӘНЕМӘ



Донъя сағыу сыңға сорналғанда,
Мөғжизәһен көтөп сәғәттең,
Иң ҙур шатлыҡ – йәнәш талпыныуы
Һинең менән минең йөрәктең.

Мәңге бергә, ти был йырлы миҙгел –
Киләсәккә беҙгә ул теләк.
Йылдар үткәс, ошо хозур мәлде
Ултырайыҡ бергә хәтерләп!

## ДУҪЫМА

Йылдар килә-китә торор,
Теләктәр ҙә яңырыр,
Шаулы тормош юлдарында
Яңы дуҫтар табылыр;



Ә беҙ һаман, бөгөнгөләй,
Яңы йылдар һанайыҡ,
Иҫкерешеп бөтһөн йылдар,
Беҙ – дуҫ булып ҡалайыҡ!

# *ҠУЯН ТУРАҺЫНДА ХАЛЫҠ ИЖАДЫНАН*

**Арба менән ҡуян ҡыуыу** – килешмәгән, хилаф эш эшләү

**Атмаған ҡуянға ҡаҙан аҫыу** – әле булмаған эште һөйләү

**Ҡуян арба** – еңелгә егелә торған ике тәгәрмәсле арба

**Ҡуян йөрәк** – ҡурҡаҡ кеше

**Ҡуян ҡаныңдай** – ҡуйы сәй

**Ҡуян уйыны** – ҡуян һәм бүре булып ҡасышлы уйнау

**Ҡуян ирен** – зәғиф ирен

**Сысҡан йылы** – туҡлыҡ, ҡуян йылы йотлоҡ булыр

**Бер йылға ҡуян тиреһе лә сыҙаған**

**Ике ҡуянды ҡыуған – берҙән дә тороп ҡалған**

**Йүгереп ҡуян ҡыуалар, ултырып аҡыл йыялар**

**Йүнһеҙ һунарсы арба менән ҡуян ҡыуған**

**Ҡомһоҙ эт ҡуян алмаҫ, алһа ла, тиреһе ҡалмаҫ**

**Ҡуян ул тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған**

**Ҡуян үҙ күләгәһенән ҡурҡыр**

**Ҡуян үлеме ҡамыштан, ир үлеме – намыҫтан**

# Ҡар бөртөгө

Ҡәҙерле уҡыусылар, һеҙҙең иғтибарығыҙға Яңы йыл ҡар бөртөгөн тәҡдим итәбеҙ. Үҙ ҡулдарығыҙ менән эшләнгән әйбер шыршығыҙҙы тағы ла гүзәлерәк итәсәк, яҡындарығыҙға ла матур бүләк буласаҡ.

1. Бының өсөн киңлеге – 16, буйы 8 см булған һигеҙ ҡағыҙ киҫәге кәрәк буласаҡ.
2. Ошо киҫәктәрҙе уртаға бөкләгеҙ.
3. Һүрәттә күрһәтелгәнсә, үҙәк өлөшөнән тағы ла бөкләргә кәрәк булыр.
4. Уң һәм һул яҡлап ике осонан өсмөйөштәр эшләгеҙ.
5. Ошо ике өсмөйөштө бер-береһенә тоташтырып, киҫәкте уртаға бөкләгеҙ.
6. Килеп сыҡҡан һигеҙ фигураны, һүрәттә күрһәтелгәнсә, б е р - б е р е һ е менән тоташтырығыҙ.






# “Ҡуян” салаты

Яңы йыл табынына тәмле салат әҙерләргә тәҡдим итәбеҙ. Дүрт кешегә иҫәпләнгән был салат өсөн 2 бешкән картуф, 100 г консерваланған йәшел борсаҡ, 200 г бешкән тауыҡ ите, 4 бешкән йомортҡа, 2 йәшел ҡыяр (маринадланған булһа ла ярай), 4 аш ҡалағы ҡаймаҡ, хуш еҫле борос бөртөгө, петрушка һәм биҙәү өсөн 1 фасоль ҡуҙағы алына.

Салатты әҙерләү: картуфты һәм ҡыярҙы ҡабығынан әрсергә. Тауыҡ итен, ҡыярҙы һәм картуфты шаҡмаҡлап турарға. Шунан йәшел борсаҡ ҡушып, ҡаймаҡ менән бутарға, самалап тоҙ һалырға.

Салатты дүрт тәрилкәгә, хоккей шайбаһы формаһы биреп, һалырға. Петрушканың япраҡтарын йыуырға, яҡшылап ҡороторға һәм салат өҫтөнә һалып сығырға. Хәҙер һәр “йәшел аҡлан”ға йомортҡа – “ҡуян”ды ултыртып сығырға кәрәк. “Ҡуян” былай эшләнә. Теш таҙартҡыстарын бәләкәй генә өлөшсәләргә һындырып, улар ярҙамында һәр йомортҡаға борос бөртөгөн беркетеп, күҙҙәр, танау, петрушка япраҡтарынан мыйыҡ эшләргә. Аҙаҡ фасоль ҡуҙағын ҡырҡып, ҡолаҡтар яһарға.

Ҡолаҡтарҙы кишер һәм алманан да эшләргә мөмкин. Салат әҙер!



# Яңы йыл ҡыҫаны

Иҫ киткес матур, ғәҙәти булмаған ҡыҫан эшләп, яҡындарығыҙға бүләк итә алаһығыҙ. Бының өсөн һеҙгә буйы – 22, иңе 17 см булған ике ҡатырға бите кәрәк. Иң башта ошо үлсәмдәр буйынса ҡыҫан төшөрәбеҙ. Шунан һуң фотоһүрәт өсөн үлсәм билдәләйбеҙ. Ҡыҫандың иңен 2,5 см итеп алабыҙ. Ҡыҫанды киҫеп алғас, уны биҙәүҙе башлайбыҙ. Бының өсөн метр самаһы сағыу туҡымалар, муйынсаҡ бөртөктәре һәм ептән эшләнгән биҙәгестәр талап ителә. Һүрәттә күрһәтелгәнсә, ҡыҫанды тар туҡыма киҫәге менән уратабыҙ һәм муйынсаҡ бөртөктәре менән биҙәйбеҙ. Икенсе ҡатырға битен алып, ҡыҫандың арткы яғына елем менән йәбештерәбеҙ. Фотоһүрәтте квадрат, түңәрәк йә оҙонса түңәрәк рәүешетә урынлаштырырға мөмкин.



# Бүләккә – йомшаҡ уйынсыҡ!

Ҡәҙерле дуҫтар! Көнсығыш календары буйынса 2011 йыл – Ҡуян йылы. Яҡындарығыҙға, дуҫтарығыҙға яңы йылға нимә бүләк итергә тип баш ватаһығыҙмы? Һүрәттә күрһәтелгән йомшаҡ ҡуянды үҙ ҡулығыҙ менән эшләп, бүләк итә алаһығыҙ. Бының өсөн һеҙгә ни бары мамыҡ, поролон, теләһә ниндәй туҡыма киҫәктәре генә кәрәк буласаҡ. Йәгеҙ, эшкә тотондоҡмо? Костюмын үҙегеҙ теләгәнсә тегегеҙ. Ҡуяндың битен фломастерҙар менән төшөрәбеҙ.









Ҡарҙа ҡуян эҙҙәре

# АҠ ҠУЯН, ЙОМШАҠ ҠУЯН



**Киләһе 2011 йылды көнсығыш календары буйынса ҡуян (йә бесәй) йылы тип атайҙар. Башҡорттарҙа булған мөсәл йыл иҫәбе буйынса ул һынылышы яғынан йомшаҡ йә еңел (ҡатын-ҡыҙ холоҡло йылдар: һыйыр, ҡуян, йылан, ҡуй, тауыҡ, ҡабан йылдары) тип баһаланған. Шуға күрә беҙ бында килер йылдың хужабикәһе булған аҡ ҡуян тураһында ҡайһы бер аңлатма биреп китмәксебеҙ.**



Толай

Әйтергә кәрәк, беҙ йорт ҡуяны тип йөрөткән кролик менән ҡырҙа йәшәгән үрғуян һәм урманда көн иткән аҡ ҡуян араһында айырма ҙур. Кроликтың тыуған ере Испания һанала, уны Италия монахтары ит өсөн үрсетә башлай. Белеүегеҙсә, улар ирektә (ҡырағай кроликтар күп ерҙә әле лә йәшәй, мәҫәлән, Австралияла улар тәбиғи афәткә әйләнгән, Украинала ғәҙәти күренеш һанала) тәрәнгә киткән өңдәр ҡороп, ҙур көтөүҙәр булып йәшәй, балалары йөнһеҙ һәм һуҡыр булып тыуа. Кроликтың үҙ балаһын ашау сифаты ла бар. Йылы яҡта йәшәгәс, кроликка тиреһенең төҫөн алыштырыуҙың да кәрәге юҡ. Кеше тарафынан үрсетә торғас, йөнө төҫө һәм ҙурлығына ҡарап, кроликтарҙың йөҙҙән ашыу тоҡомо барлыҡҡа килтерелгән. Улар араһында өйҙә бесәй урынына аҫырай торған бәләкәй генәһе лә, ит өсөн аҫыралған 8 килограмм ауырлыҡтағылары ла бар.



Аҡ ҡуян

Ә бына беҙҙәге ҡырағай ҡуяндарҙың балалары тыуғас уҡ үҙаллы йәшәп китә, улар өң ҡаҙып та мәшәҡәтләнмәй. Билдәле булыуынса, ҡыр ҡуяндары ситлектә йәшәй һәм үрсей алмай. Улар биологик төр буларaҡ та айырыла, шуға йорт ҡуяны менән үҙ-ара аралашып, уртаҡ балалары ла булыуы мөмкин түгел (мәҫәлән, туған булған эт менән бүренең уртаҡ балаһы тыуа ала). Ҡуяндар урман-ҡырҙарҙа яңғыҙаҡ көн күрә. Уларҙың донъяла утыҙҙан ашыу төрө бар. Кролик баҫып киткән Австралиянан башҡа, ҡуяндар һәммә ерҙә лә йәшәй. Ҡуянды ҡылый тип атауҙары дөрөҫ, уның ысынлап та күҙе насар күрә. Ә бына еҫ тойоу һәм ишетеү уларҙа бик яҡшы үҫешкән.



Маньчжурия ҡуяны

Рәсәйҙең көньяҡ өлкәләрендә ҡуяндарҙың тағы ике төрө – **маньчжурия ҡуяны** һәм **толай** тигән ҡуян йәшәй. Улар ҙа ҡышҡылыҡҡа тунын алыштырып мәшәҡәтләнмәй, үҙҙәре ваҡ ҡуяндар рәтенә керә (ауырлыҡтары 2,5 кг самаһы). Барлыҡ ҡуяндар ҙа күпселектә төнгө йәнлектәр, көндөҙ йәшеренеп яталар. Дошманынан ҡасҡан ваҡытта ҡуяндың тиҙлеге 70 саҡырымға етә. Өҫтәүенә, ул туп-тура һыпыртмай, һикереп, ялтанып, әйләнеп йөрөп эҙ яҙҙырырға тырыша. Шулай ҙа ҡуяндар гел бер урындараҡ йәшәүҙе өҫтөн күрә, бының менән һунарсылар оҫта файҙалана. Гел бер һуҡмаҡтан йөрөгән ҡуянды иң ябай тоҙаҡҡа ла эләктереү ҡыйын түгел. Ҡаҙағстанда үрғуянды һунар ҡоштары ярҙамында аулау ҙа һаҡланған.



Үрғуян

**Үрғуян** ҡышҡылыҡҡа шулай уҡ ап-аҡтан кейенмәй, асыҡ һорғолт ҡала. Ул ялан яҡ һәм йылы яҡ йәнлеге, беҙҙең яҡтарға күсереп килтерелгән һәм үрсеп киткән (Әйткәндәй, уның аҡ ҡуян менән нәҫеле тумаҡ исемен йөрөтә һәм улар, үҙ сиратында, нәҫел дә бирергә һәләтле). Шуға ла беҙ, Йыл хужабикәһе ҡуян тураһында һүҙ алып барғанда, боронғо башҡорттар ошо тирәлә гел йәшәгән аҡ ҡуянды күҙ уңында тотҡан, тип фаразлай алабыҙ.

Бөйөк еңеү

# ПАРТИЗАНДАР АРАҺЫНДА

Бөйөк Ватан һуғышынан тыуған ерҙәренә ҡайтырға насип булмаған яугирҙар араһында минең ҡарт олатайым Мөләков Әхмәт Сабит улы ла бар. Ул 1925 йылда ябай крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Шаян да, тыңлаусан да, тырыш та, ғөмүмән, бик яҡшы егет була ул. Әгәр тере ҡалһа, өйләнер, балалары булыр, бөгөн ейәндәрен ҡарар ине...

Тыуған илен, тыуған ерен дошмандан тапата буламы һуң башҡорт егете? Һуғышта Әхмәт олатай бер нисә иптәше менән әсиргә эләгә. Ләкин бөтә уйы плендан ҡасыу була. Һәм ҡаса ла. Аҙнаға яҡын урман-яландар ҡыҙыра, арыған, хәлһеҙләнгән килеш бер ауылға килеп сыға. Уны ашаталар, кейендерәләр, немецтарҙан йәшереп, үҙҙәрендә йәшәтәләр. Әхмәт, йәш һәм сибәр егет, ошонда бер ҡыҙ менән таныша. Тик үҙе фронтҡа, һаман алғы һыҙыҡҡа, ынтыла ул. Нисек тыныс йәшәп ятмаҡ кәрәк: тирә-яҡта дошман, бөтә ил халҡы фашистар менән алыша...

Әхмәт ауылдан сығып китә лә партизандарға барып ҡушыла. Унда иһә Лена исемле ҡыҙҙы, ысын мөхәббәтен осрата. Отрядта улар өйләнешәләр, балалары тыуа.

Был турала теге ауылдағы ҡыҙы белеп ҡала. Ғәфү итә алмай ул ҡарт олатайымдың был ҡылығын: немецтарға барып, Әхмәт һәм партизандар отряды тураһында еткерә. Ә Әхмәт ауыл менән партизандар араһында бәйләнеш тотҡан була. Бер килгәнендә немецтар уны эләктерә. Яҙалайҙар, һорау алалар, ләкин Әхмәт иптәштәрен һатмай.

Әхмәттең немецтар ҡулынан һәләк булыуы тураһында Лена ҡарт олатайымдың ата-әсәләренә хат яҙа, хәрби формалағы фотоһын ебәрә. Шулай дауам итә минең ҡарт олатайымдың нәҫеле.

Минең уйымса, хәҙерге йәш быуынға атай-олатайҙарҙан үрнәк алырға кәрәк. Улар тыуған ил өсөн үҙҙәрен ҡорбан итергә лә әҙер булғандар. Мин һәр һалдат алдында башым эйәм.

**Айҙар МӨЛӨКОВ,**
**Күмертау ҡалаһының 3-сө Республика башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы.**

# ҠӘҺӘРЛЕ ҺУҒЫШ ВАҠЫТЫ

**(Өләсәйем Йыһаншина Ғәтиә Мөхәммәт ҡыҙының хәтирәләренән)**

Һуғыш ваҡытында өләсәйемә ни бары ике генә йәш булған. Туғандары тураһында ул миңә түбәндәгеләрҙе бәйән итте: "Апайымды, Вәхитова Нәфисәне, 14 йәшендә Силәбегә урман киҫергә ебәргәйнеләр, ул шунда аслыҡтан үлеп ҡалды. Икенсе апайым, Ғәтифә, 1940 йылда күрше ауылға тормошҡа сыҡҡайны. Ире менән бер генә йыл йәшәп ҡалдылар. Еҙнәмде һуғышҡа алып киттеләр, шул китеүенән ул өйләнеп ҡайтманы. Апайым бер бала менән генә ҡала. "Исмаһам, ошо баламды кеше итәйем," – тип, көнө-төнө, арыу-талыу белмәй, бер һыныҡ икмәк өсөн урман ҡырҡыу эшендә йөрөй."

Эйе, һуғышта бер кемгә лә еңел булмаған, тип уйлайым мин. Өләсәйемдең әсәһе Ғәфифә йәш кенә ваҡытында һуҡыр булып ҡала. Иген ағыулаған саҡта, күҙенә ағыу төшөп, һуҡырая. Һуҡыр булһа ла, балаларын үҙе үҫтерә ул.

Өләсәйемдең атаһын хеҙмәт армияһына алып китәләр. Һуғыштың аҙағынаса йөрөй. Аҙаҡ ғүмере буйы малсы булып эшләй.

Иң ҙур ағаһын да, Вәхитов Шәйәхмәт Мөхәммәт улын, һуғышҡа алып китәләр. Һуғышта ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, үпкәһенә һалҡын тейҙереп, уң аяғын тубыҡтан ҡырҡтырып, тыуған ауылына әйләнеп ҡайта ул. Өйләнә, ҡатыны менән ике бала үҫтерәәләр.

"Һуғыш башланғанда Шәүәли ағайыма 9 йәш була. Ул да ололарға ҡулынан килгәнсә ярҙам итә. Бөгөн ул – Социалистик Хеҙмәт Геройы, һауынсы, әле хаҡлы ялда.

7 йәшлек Ғәлләметдингә лә тормош йөгөн иртә татырға тура килә. Ағайҙарым ҡул менән арыш та сәсәләр, ер тырматалар, Мәләүездән орлоҡ та ташыйҙар.

Һуғыш ваҡытында кешеләр аслы-туҡлы йәшәне. Эшләгән өсөн аҡса түләмәнеләр, 200 грамм йә ярма, йә арыш оно бирҙеләр. Төп аҙыҡ – үлән булды. Беҙ үҫкәндә тамағыбыҙ ас, өҫтөбөҙ яланғас булды, яланаяҡ йөрөнөк. Электр ҙа, газ да булманы, тиҙәк һуҡтыҡ, шуны утын урынына яҡтыҡ. 50 йылдарҙа ғына туйғансы икмәк ашай башланыҡ," – тип һөйләй өләсәйем.

**Гөлназ ЙЫҺАНШИНА,**
**Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы.**

# ОЛАТАЙЫМ

Минең олатайыма 2010 йылдың 3 мартында 90 йәш тулды. Ул 1940 йылда армия сафына алына, 1941 йылдың 22 июнендә Белоруссияла хеҙмәт иткән була. Немец ғәскәрҙәре шунда уҡ уларҙың полкы урынлашҡан ерҙе баҫып ала. Ә дивизия яңы алынған һалдаттарҙан, институтты тамамлап ҡына сыҡҡан офицерҙарҙан тора. Тәжрибәле белгестәрҙе, хеҙмәт тәмен татыған һалдаттарҙы һуғыш алдынан ғына Япония сигенә ебәрәләр.

Олатайымдың полкы һуғыша-һуғыша һаҙлыҡлы ерҙәргә, Фин ҡултығына барып сыға. “Алыш бик ҡаты булды. Фашистар һауанан да, ерҙән дә һөжүм итәләр . Минең пушкам селпәрәмә килде. Пушканы һөйрәгән ат та үлде”, – тип һөйләй олатай. Яраланған, башы шаңҡыған яугир пленға эләгә, шуға ла күп иптәштәренең яҙмышын бөгөнгәсә белмәй.

Немецтар яралыларҙы ата, ә олатайымды иптәштәре атырға бирмәй. Бөтә әсирҙәрҙе машинаға тейәйҙәр ҙә ҡайҙалыр алып китәләр. Уларҙы ниндәйҙер концлагерға алып киләләр. “Лагерға керер алдынан венгр һалдаттары минең кем булыуымды һоранылар. Башҡорт булыуымды белеп: “Беҙ һеҙҙең менән ҡанҡәрҙәштәр,” – тинеләр. Минең яралы икәнлекте күргәс, мине дауалауҙы һорап, немец офицерына мөрәжәғәт иттеләр. Юҡһа, яраларҙан мин үлгән дә булыр инем. Офицер рөхсәт иткәс, станцияға яҡын ғына йәшәгән бер ҡатындың йортона урынлаштырҙылар. Ун көн самаһы булдым мин унда.

Аҙаҡҡа тиклем һауығырға тура килмәне, тиҙ арала йыйҙылар ҙа лагерға алып барҙылар. Баҡһаң, станциялағы бер эшелонды партизандар шартлатҡан икән. Беҙҙең бөтәбеҙҙе лә көслө һаҡ аҫтында эшкә ектеләр: станцияны шартлатылған эшелон ҡалдыҡтарынан таҙартырға кәрәк ине, ә ике әсирҙе, мине лә, аттар ҡарарға ебәрҙеләр. Бер немец офицеры минән көлә бит – тоттом да бәргеслэнем. Мине шунда уҡ ағасҡа ҡуша бәйләп тә ҡуйҙылар.

Ҡыҫҡа табан теге офицер атырға алып китте. "Иҫке окопты таҙартып, үҙеңә ҡәбер ҡаҙ!" – тине ул, мыҫҡыллап. Бергә килгән иптәше ҡайҙалыр китеп олаҡты. Ошонан да яҡшы мәл булмаҫ, тип, теге немецты окопҡа һөйрәп төшөрҙөм дә, дөмбәҫләнем дә дөмбәҫләнем. Ул ҡоралын да алырға өлгөрмәне.

Фрицтың кейемен кейҙем дә, самалап, үҙебеҙҙең яҡҡа юл алдым. 10 саҡырым самаһы барғас, бер ауылға килеп сыҡтым. Оло ғына бабай, һарайында йәшереп, өс көн йәшәтте. Бабай миңә юлға аҙыҡ бирҙе, көнсығышҡа ҡарай барырға кәрәклеген әйтеп, оҙатып та ҡуйҙы.

Күрәһеләрем бар икән: оло юл аша сыҡҡанда тағы немецтарға тап булдым. Тағы ла комендатура, концлагерь, үлем яҙаһын көтөү... Ниндәй генә эштәр эшләмәнек беҙ... Концлагерҙан беҙҙе үҙебеҙҙекеләр азат итте, ләкин шатлығыбыҙ оҙаҡҡа барманы: әсирҙәрҙе совет лагерҙарына алып киттеләр. Беломорканалда эшләнек, йыл ярым үткәс, хәрби хеҙмәткә алдылар. Мин шундағы хәрби объектты һаҡланым", – тип һуғыш хәтирәләре менән бүлешә олатайым.

Ул 1949 йылда тыуған ауылына әйләнеп ҡайта, тормош ҡора, 6 балаға ғүмер бирә.

Бөгөн олатайым менән өләсәйем бик матур итеп йәшәп яталар.

Өләсәйем Зәкиәнең дә яҙмышы бик үк еңелдән булмаған. 1942 йылда 16-18 йәшлек ҡыҙҙарҙы Кемерово өлкәһенә ағас йығыу һәм ҡырҡыу эшенә ебәрәләр. Еңеү көнөнән һуң ғына тыуған яҡтарына ҡайтырға насип була уларға.

Өләсәйем үҙе тураһында күп һөйләргә яратмай. "Минең яҙмыш – ил яҙмышы. Кеше нимә күрһә, мин дә шуны күрҙем", – ти ул.

Ғорурланам мин һеҙҙең менән. Һеҙ ауырлыҡтарға бирешмәгәнһегеҙ, киләсәктәге яҡты көндәргә өмөтләнеп йәшәгәнһегеҙ.

**Биктимер МӨХӘММӘТОВ,**
**Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты.**

## КОНКУРСТА ЕҢЕҮСЕЛӘРҘЕ ҠОТЛАЙБЫҘ!

**Ошо фажиғәле лә, фәһемле лә яҙмыштар тураһында хикәйәттәр менән беҙ “Аманат” журналында йылдан ашыу барған “Бөйөк Еңеү” конкурсын тамамлайбыҙ. Шулай итеп, был конкурсыбыҙҙа еңеүселәр тип түбәндәге авторҙарыбыҙ иғлан ителә:**

**Гөлнара ФӘХРЕТДИНОВА**, Баймаҡ ҡалаһының 1-се урта мәктәбе уҡытыусыһы;

**Айгүзәл ЙӘНСУРИНА**, Бөрйән районының Нәби мәктәбе уҡытыусыһы;

**Зәлиә СОЛТАНГӘРӘЕВА**, Күмертау ҡалаһының 6-сы мәктәбе уҡытыусыһы;

**Айгиз ӘҘЕҺӘМОВ,** Өфө ҡалаһының Башҡорт лицей-интернаты уҡытыусыһы;

**Гөлсибәр ИСЛАМҒОЛОВА**, Ейәнсура районының Ново-Николаевка мәктәбе уҡытыусыһы;

**Айҙар МӨЛӨКОВ**, Күмертау ҡалаһының 3-сө Республика башҡорт гимназия-интернаты.

**Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ! Һеҙгә “Аманат” журналының Маҡтау билдәһе һәм иҫтәлекле бүләктәр ебәреләсәк.**



# Аҡъюлай ҺЫЛЫУЫ

Ай, һылыу!



**Таныш булығыҙ: Эльмира ҠАРАСОВА. Өфөләге 48-се башҡорт лицейының XI “Д” синыфында белем ала. Бәйләргә, мәрйендәрҙән төрлө әйберҙәр яһарға ярата, һүрәт төшөрөргә лә оҫта. Прическалар эшләргә, аш-һыу бешерергә әүәҫ. Хыялы – “Һылыуҡай” республика гүзәллек бәйгеһендә ҡатнашыу.**



**Илүзә МӨХӘМӘТҒӘЛИНА, Сибай ҡалаһынан:** “Буш ваҡытта әсәйемә ярҙам итергә, компьютерҙа уйнарға яратам. Төрлө конкурс, олимпиадаларҙа ҡатнашыу миндә ҙур сәм уята”.



**Эльвира ҒИЛМЕТДИНОВА, Балаҡатай районының Айҙаҡай ауылынан:** “Әҙәби китаптар уҡыйым, спорт менән шөғөлләнәм. Бигерәк тә баскетбол, волейбол уйындары оҡшай. Мәктәптә үткән төрлө конкурстарҙа, байрамдарҙа ла теләп ҡатнашам. Быйыл районда “Урал батыр” эпосын һөйләүселәр бәйгеһендә икенсе урын яуланым”.



**Анастасия ГРИВЦОВА, Күгәрсен районынан:** “Мораҡ башҡорт гимназияһында уҡыйым. Төрлө конкурс, олимпиадаларҙа ҡатнашам, призлы урындар ҙа яулайым. Буш ваҡыт булһа, әҙәби китап уҡыйым. Пластилиндан төрлө һындар эшләргә яратам”.



**Наҙгөл ХӨСНӨТДИНОВА, Әбйәлил районының Байым ауылынан:** “Бейеү, батик, драма түңәрәктәрендә шөғөлләнәм. Йырларға, һүрәт төшөрөргә, китап уҡырға әүәҫмен. Тылсымға эйә ҡыҙҙар тураһындағы “Винкс” әкиәтен ҡарарға яратам. Әхирәтем Айһылыу менән шул ҡыҙҙар тураһында наклейка, календарь, китаптар йыябыҙ”.



# Яңы йыл кисәһе өсөн уйындар

**Һәр беребеҙҙең Яңы йыл мәжлесен онотолмаç итеп үткәргеһе килә. Яраткан геройҙарға әүерелеүҙәр, йыр-бейеүҙәр, фотоға төшөүҙәр – былар барыһы ла Яңы йыл байрамында булырға тейеш. Әммә мәжлескә килгән ҡунаҡтар, ашап-эсеп кенә ултырып, бер төрлөлөктән арый башлай, көтөп алынған байрамдың да йәме китә... Нимәлер етмәй! Һеҙгә ярҙамға киләбеҙ: байрамға байрам төçө биргән уйындар етмәй, уларҙың сценарийын, фантазияғыҙға ҡарап, үҙгәртергә лә мөмкин. Еңеүселәргә алдан әҙерләнгән приздар бирһәгеҙ, бигерәк тә яҡшы.**



## Ҡар бөртөгө

Һәр балаға «ҡар бөртөгө» – бәләкәс кенә мамыҡ киҫәге бирелә. Сигнал буйынса йомшартылған шарҙар һауаға осорола. Бала уларға аҫтан өрөргә тейеш. Кемдең ҡар бөртөгө ергә оҙағыраҡ төшмәй – шул еңеүсе.

## Шәп йырсы

Кәпәскә бәләкәс кенә ҡағыҙҙар һалына, уларҙың һәр береһендә бер һүҙ яҙылған (мәҫәлән, шыршы, Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, боҙбармаҡ һ.б.). Балалар, сиратлап хаттарҙы кәпәстән сығарып, яҙылған һүҙ мотлаҡ тексында булған Яңы йыл йырын башҡарырға тейеш.



## Ҡағыҙҙан ҡар бөртөгө



Был уйында кем тиҙерәк салфетканан йәки ҡағыҙҙан ҡар бөртөгө ҡырҡа – шул еңеүсе исемен яулай.

## Яңы йыл һүҙҙәре

Яңы йылда нимә бар – шуны бала һанап сығырға тейеш: Ҡыш бабай, ҡар, Ҡарһылыу, бүләктәр, шыршы, шыршы уйынсыҡтары, торт, иҙәндә шыршы энәләре, фонарҙәр һ.б. Кемдең идеялары беренсе бөтә – шул уйындан сығарыла.

## Шыршыға нимә эленгән?

Бала бер минут эсендә иғтибар менән шыршыға ҡарай һәм, арты менән боролоп, унда нимә эленгәнен мөмкин тиклем тулыраҡ һанап сыға. Кем күберәк биҙәгесте хәтерендә ҡалдырған – шул еңеүсе.

## Бәйләнгән күҙ менән

Һуҙылып эленгән бауға айырым баусыҡтарҙа төрлө ваҡ приздар эленә (уйынсыҡтар, кәнфиттәр һ.б.). Уйында ҡатнашыусы баланың күҙҙәре бәйләнелә һәм ҡулына ҡайсы бирелә. Ул, ошо бау янына килеп, бер призды ҡырҡып алырға тейеш. Ҡайсы икенсе балаға бирелә һәм был тамаша һуңғы призға тиклем дауам итә (приздарҙы күберәк әҙерләргә кәрәк буласаҡ).



## Мандаринлы футбол

Уйын өҫтәлдә уйнала. Футболда уйнаусылар – һәр баланың һуҡ һәм урта бармаҡтары. Туп был осраҡта – мандарин.

***Киләһе уйындарҙа балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә ҡатнаша ала.***

## «Туңдырҙы»

Бәләкәс кенә ҡағыҙҙарға тән өлөштәре яҙыла. Ҡағыҙҙар бөкләнә һәм ҡапсыҡҡа һалына. Тәүге ике кеше ҡапсыҡтан берәр ҡағыҙ алып уҡый һәм яҙылған тән өлөштәре менән беребереһенә һыйына, йәки «туңа». Шулай һуңғы уйынсыға тиклем дауам итә. Һуңынан барыһы ла туңәрәк буйлап яңынан башлана, уйында ҡатнашыусылар бер-береһенән айырылырға тейеш түгел. Беренсе һуңғыға «туңа», икенсеһе беренсегә «йәбешә», һәм шулай һуңғы ҡағыҙға тиклем дауам итә. Бындай «йомғаҡ» бик ҡыҙыҡ күренә һәм уны мотлаҡ фотоға төшөрөргә кәрәк буласаҡ!

## «Ҡулхаттар»

Күберәк кеше булғанда, был уйынды уйнауы ҡыҙығыраҡ булыр. Уйында ҡатнашыусыларҙың барыһы ла киләһе фразаны ҡағыҙҙарға яҙырға тейеш: «Киләһе йылда мин...». Ҡағыҙҙар пакетка һалына һәм бутала, һуңынан уйынсылар сиратлап ҡулхаттарҙы сығарып, унда яҙылғанды уҡый. Бик ҡыҙыҡ, көлкөлө килеп сыға, бигерәк тә ир кеше: «Киләһе йылда мин бала табасаҡмын», – тиһә.



**Айһылыу АБДУЛЛИНА әҙерләне.**

# Яңы йыл бүләге



Ҡыш миҙгелен кем генә яратмай икән! Көрпәк ҡарҙар, тылсым вәғәҙә иткән Яңы йыл байрамы – мөғжизәгә торорлоҡ бит! Вәсимә лә һағынып көтөп ала ошо мәлде. Аҡ бурандар менән елеп килер мөхәббәтен көтә, өмөт итә.

Әле ул осоп-ҡунып тигәндәй мәктәптә үтәсәк Яңы йыл кисәһенә әҙерләнә. Ҡарһылыу буласаҡ ул быйыл. Үҙеңде шундай байрамдың төп хужабикәһе итеп тойоу ғына ла күңеленә дәрт бирә. Бигерәк тә, янында бөтә ҡыҙҙарҙың һушын алған Ҡыш бабай булғанда.

Фәдисте бөтәһе лә оҡшата. Тәнәфес ваҡытында ла эргәһендә тик ҡыҙҙар ғына уралана. Уға арнап әллә күпме шиғырҙар яҙһа ла, төштәрендә күрһә лә, Вәсимә уның эргәһенә барырға ҡыймай, ситтән генә күҙәтә, көнләшеп тә ҡуйғылай. Ҡараштары осрашһа, ҡаушай ҙа ҡуя. Үҙүҙенә ышанған, тәкәбберерәк Фәдис күҙен ҡыҫып йылмайып үтеп китһә, әллә шатлыҡтан, әллә артыҡ оялыуҙан ни эшләргә белмәй, ҡыҙарып сыға. Парталаш әхирәте Зилә өйрәткәнсә, үҙе башлап өндәшер ине, ҡыйыулығы етмәй.

Яңы йыл кисәһендә Фәдистән оялып, әйтер һүҙемде әйтә алмай йонсормон инде, тип ҡурҡты Вәсимә. Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, уныһы репетиция ваҡытында янына килеп, ғәҙәттәгесә йылмайып күҙен ҡыҫты ла көтөлмәгән хәбәр һалды:

– Минең өсөн генә Ҡарһылыу булырға риза булғаныңды беләм бит мин. Ҡарашыңдан тоям инде. Күптән яратаһыңмы мине?

Вәсимә ни тип әйтергә лә белмәне. Күптән көткән мәл кеүек серенде сис тә һал инде, әммә ҡыҙ:

– Юҡты һөйләмә, зинһар, – тип кенә ҡуйҙы.

– Юҡ түгелсе бер ҙә... бөтәһе лә мине оҡшата. Һин матурһың былай. Тик шул ҡырағайлығың бар инде.

Үҙен артыҡ әрһеҙ тотҡан егет алдында ҡыйын ине Вәсимәгә, Фәдискә бер генә ҡараш һирпте лә репетиция бүлмәһенән сыҡты ла китте.

Бәхеткә күрә, барыһы ла яҡшы ғына барҙы, үҙ ролен еренә еткереп башҡарҙы шикелле. Бәлки, бүтән әхирәттәре алдында маһайыу кеүек тойғо үҙенекен иткәндер.

Ҡыш бабай күстәнәстәре менән тәмләп сәйэскәс, Яңы йыл дискотекаһына ла ваҡыт етте. Һәр береһе ошо мәлде көтөп ала, сөнки аҙна элек эленеп ҡуйылған почта йәшнигенән открыткалар таратыу башлана. Вәсимәгә лә күп кенә ҡотлауҙар бар ине. Күбеһе дуҫ-иштәренән, ә бына икәүһендә һөйөү һүҙҙәре лә бар. Береһе параллель класта уҡыған Мараттан. Етди ҡарашлы, әҙ һүҙле егет ул. Үтеп сығып бармаһа ла, һәр кемеһе уны хөрмәт итә. Икенсеһе Фәдистән ине. Беренсеһенән айырмалы рәүештә һаран ғына һүҙҙәр менән яҙылһа ла, Вәсимә балалай ҡыуанды.

Дискотека барышында ҡуйылған талғын музыка аҫтында өйрәлгәндә Фәдис ҡыҙҙың ҡолағына бышылданы:

– Мине оҡшатһаң, музыка тамамланыу менән беренсе ҡатҡа төш. Тынысыраҡ урында һөйләшеп алырға кәрәк.

Шатлығынан ни эшләргә лә белмәгән ҡыҙ йүгерә-атлай егет артынан төштө. Килешелгәнсә гардероб эргәһенә килеүенә уны бер өйөр малайҙар ҡаршы алды. Вәсимәне күреү менән Фәдис ҡысҡырып ебәрҙе:

– Ха-ха-ха... бына күрҙегеҙме?! Әйттем бит, мине ярата ул, тип! Һыр бирмәйем тип кенә иғтибар итмәгән кеше була. Отолдоғоҙ, егеттәр! Бирегеҙ вәғәҙәләшкән хаҡты...

Бындай мыҫҡылды көтмәгән ҡыҙ шым ғына ситкә китте лә эскәмйәгә сүгәләне. Фәдистең шундай йәмһеҙ ҡыланыуынан ауыр ине уға. Күңелен бушатырға әхирәттәренә һөйләр ине, оят, илай ҙа алмай. Бер нисә секунд эсендә генә егет Вәсимә алдында матурлығын юғалтты, күңелендә ытырғаныу уятты.

– Ҡайғырма шул йүнһеҙ өсөн. Барыбер ғәйебен таный торған кеше түгел бит ул, – тип өндәшкәнгә ҡыҙ һиҫкәнеп китте.

Алдында тыуҙған өҫ-башын рәтләй-рәтләй Марат баҫып тора ине:

– Кәрәген бирҙем инде. Тағы үпкәләтһә, әйтерһең.

Был кисте мәктәптән улар бергә ҡайтты. Эскерһеҙ Марат менән һөйләшеү Вәсимәгә шул тиклем рәхәт ине! Фәдискә булған асыуын да онотто хатта. Ҡайтып еткәнсе көрттә аунап, ҡар бәрешеп шаярыштылар, ихлас һөйләштеләр.

Яңы йыл кисендә Марат һөйгәненә ҙур аҡ йомшаҡ айыу бүләк итте. Унан да ҙурыраҡ бүләк – уның һөйөүе. Ошо тылсымлы төндә ҡыҙ бер нәмәне аңланы: ялған һүҙҙәргә, матур күҙҙәргә алданырға ярамай, ысын һөйөү ул ихласлыкта, эскерһеҙ күҙҙәрҙә.

**Нәркәс АЛСЫНБАЕВА.**



# Дуҫ булайыҡ!

12 йәш. Буға. Һүрәт төшөрөргә, бейергә, йырларға, журналдар уҡырға яратам. 12-13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Сәлихова Динара.**
**453663, Баймаҡ районы,**
**Әмин ауылы.**
**Т.: 89656585623.**

***

15 йәш. Уҡсы. 15-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәм.

**Сәғитова Рүзилә.**
**453061, Ғафури районы,**
**Ҡыҙыляр ауылы,**
**Үҙәк урам, 20.**
**Т.: 89639010963.**
**ICQ: 355158188.**

***

15 йәш. Һыуғояр. 14-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән смс-хәбәр көтәм.
**Мансурова Әлиә.**
**453238, Ишембай районы,**
**Түбәнге Әрмет ауылы,**
**Ғиззәтуллин урамы, 125.**
**Т.: 89174929419.**



***

Ылаҡ йондоҙлоғонда тыуғанбыҙ. Зиләгә – 16, Луизаға 17 йәш. Төрлө йәштәге ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтөп ҡалабыҙ.

**Әҙелмырҙина Луиза,**
**Әхмәткужина Зилә.**
**453503, Белорет ҡалаһы,**
**Төньяҡ урам, 6-16.**

***

1996 йылдың 31 декабрендә тыуғанмын. 13-15 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар яҙһа ине.
**Арыҫланова Нурания.**
**453672, Баймаҡ районы,**
**Икенсе Эткол ауылы,**
**Тыныслыҡ урамы, 72.**
**Т. : 89639084998.**

***

13 йәш. Һыуғояр. Йәштәштәремдән хаттар көтөп ҡалам.

**Нафикова Гүзәлиә.**
**453611, Әбйәлил районы,**
**Йәнекәй ауылы,**
**Шайморат урамы, 44.**
**Т.: 89068999639.**

Юлиәгә – 13, Эльвина, Фидалия, Әлфинәгә 14 йәш. Буш ваҡытта спорт менән шөғөлләнәбеҙ, музыка тыңлайбыҙ. 13-15 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки смс-хәбәр көтәбеҙ.

**452106, Әлшәй районы,**
**Себенле ауылы.**
**Юлиә. Т.: 89371547246.**
**Эльвина. Т.: 89279471661,**
**ISQ: 418394130.**
**Фидалия. ISQ: 73043150.**
**Әлфинә. Т.: 89371639649.**

***

15 йәш. Кәзәмөгөҙ. 15-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки шылтыратыу көтәм.
**Ғәлимова Нурия.**
**452892, Асҡын районы,**
**Ҡашҡа ауылы,**
**Таулы урамы, 52.**
**Т.: 8 (34771) 25306**

***

1997 йылдың 14 авгусында тыуғанмын. 13-15 йәштәге ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.

**Ишкилдина Нәркәс.**
**453814, Хәйбулла районы,**
**Оло Әбеш ауылы,**
**З. Вәлиди урамы, 3.**

***

11 йәш. Китап уҡырға, шиғыр сығарырға яратам. 11-13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар менән танышырға теләйем.
**Байтүрина Раушания.**
**453673, Баймаҡ районы,**
**Шүлкә ауылы,**
**Аҡназаров урамы, 5.**



***

12 йәш. Саян. Баскетбол, волейбол уйнарға яратам. Буш ваҡытта ҡул эштәре менән булышам, һүрәт төшөрәм һәм китап уҡыйым. 11-13 йәшлек ҡыҙҙарҙан хат көтәм.

**Фәтхуллина Гөлшат.**
**453396, Ейәнсура районы,**
**Яңыбай ауылы,**
**Тау урамы, 3.**

**Ҡәҙерле дуҫтар! Ошо биттә яҡындарығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә СМС-сәләмдәрегеҙҙе лә баҫтыра алаһығыҙ.**
**Быны өсөн 3443 номерына смс ебәрегеҙ. Тик хәбәрҙе яҙғас, “Хат” префиксын ҡуйырға онотмағыҙ.**

# ЙӘШӘЙБЕҘ ИКӘН!



– Малайҙар, беҙҙе эҙләп таптылар, шикелле, – тип үҙенә үҙе ышанмаҫ тауыш менән әйтеп ҡуйҙы ла Илнур, ҡолаҡ ярғыс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе. – Э-һе-һе-һе-ей!..



Буш ҡалып эсендә был тауыш әллә ҡайҙарға яңғырап китте, ҡатлы-ҡатлы булып әйләнеп килде, аҙаҡ та оҙаҡ ҡына ҡолаҡтар сыңлап торҙо һымаҡ. Балалар бер аҙға тын ҡалып, яуап булмаҫмы, тип көтә биргәйнеләр шул. Тик тауыштар, әллә ысынлап та ишетелеп кенә ҡалды, ҡабат юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Бына һиңә – мә!..



– Яңылыштыҡ, ахыры, – тип өмөтһөҙ генә сыҡты Гөлнурҙың тауышы. Тимәк, тағы ла теге яҡтылыҡ сығанағын эҙләргә, уға барып етеү юлдарын табырға ғына ҡала. Тағы ни эшләйһең инде бында?



– Киттекме? – тине Айнур, үҙҙәренең ҡайҙа икәнен онотҡандай. Әйтерһең дә, бынан ҡайҙалыр китеп була. Ниҙер эшләргә кәрәк, тигәндәй генә яңғыраны уның был һүҙҙәре.

– Тик кенә ултырайыҡ, тип һөйләштек тәһә, – тип яуапланы уға Илнур. Икеләнергә урын ҡалдырмай, таш стенаға терәлеп, сүкәйеп ултырып уҡ алды. Оҙаҡ ултырҙылар улар бер-береһенә һыйынып ҡына, эстән һәм тыштан ҡалтырашып. Әллә оҙаҡ булып күренде генәме? Бер ни тураһында һөйләшке лә килмәй. Үле тынлыҡ һәм ҡараңғылыҡта бер-береңдән хис-тойғоларын тән йылыһы аша ғына тойорға мөмкин шул. Ә уларҙың ниндәй икәнен ҡалтыраныу ғына биреп тора...





– Тс-с, малайҙар, – тип тағы тынлыҡты бүлде Илнур, әйтерһең улар шаулашып ултыра һәм тынлыҡты тыңларға бирмәй. – Тағы ла ниҙер ишетелә түгелме?

– Ҡолағың сыңлайҙыр, – тип үтә төшөнкө кәйеф менән әйтеп ҡуйҙы Айнур, шулай ҙа ҡолаҡтарын ҡарпайтты – ҡайҙандыр ысынлап та тауыштар килә түгелме?

– Тауышланып алыу ҡамасауламаҫ шулай ҙа, – тип тағы ла әллә төңгә, әллә ябай ер аҫты ҡараңғылығына баяғыса һөрән һалды Илнур. – Эй-һе-һей! Беҙ бында!!!

Һәм ни ғәжәп – уларға эс яҡтан яңғырай-һуғыла яуап килеп бәрелде! Ҡайҙан икәне лә аңлашылмай, ләкин тауыш Илнурҙың шаңдағы түгел ине! Балалар бер һүҙһеҙ һикереп тороп баҫтылар, өсәүләшеп бер оло ҡолаҡҡа әүерелгәндәй булдылар...

Тағы ла мәңгелектәй ваҡыт ағылғандай булды улар өсөн. Күңелдәрендә күптән һүрелгән өмөт ҡабат ҡысҡырыуҙы тыйҙы, тағы ла хаталаныу бөтөнләй аяҡтан йығып ҡуйһа...

– Ана! – тип яр һалды оҫҡор күҙле Гөлнур, лысҡылдаған аяҡ тауыштары менән бер юлы алыҫта күренеп ҡалған ут шәүләһен абайлап. – Ур-ра, беҙ бында!!!

Уның яңғырап тынған тауышы артынса мәмерйә эсен икенсе тауыштар яңғыратты, яҡында ялпылдап ут күренеп ҡалды, әллә нисә кешенең шау-шыу килеүе ишетелде...

Бер аҙҙан Илнур, Айнур һәм Гөлнур бер төркөм ауылдаштары оҙатыуында бая ғына (әллә кисә үкме?) үҙҙәре кергән мәмерйә ауыҙында өйкөлөшкән халыҡ алдына килеп сыҡтылар. Китте шау-гөр!..

– Ғәжәп хәлдәр, – тип аптырашты кешеләр, инде тынысланышып, ауылға ҡайтып барғанда. – Беҙҙең ауыл эргәһендә шундай мәмерйә

булһын әле! Нисек быға тиклем береһе лә белмәгән һуң был хаҡта?..

– Ә беҙ ҡайҙандыр икенсе тауыштар ишеткән һымаҡ булғайныҡ та ул, – тип асыҡлыҡ индерҙе Илнур, нисек шул тиклем эскә инеп китеүҙәре хаҡында һорашҡас.



– Күрәһең, был мәмерйәнең тышҡа табан тишектәре күп, – тип уйсанланды уның атаһы. – Егеттәр йыраҡ түгел кескәй генә бер ташөй тапҡайнылар, тик ул тарая барып бөтә, тинеләр...



– Тимәк, – тип һығымта яһаны география уҡытыусыһы Миҙхәт ағай, – тиҙҙән ул тишек тә ҙурайып, яңы ишек яһаясаҡ. Һыу юлдары күҙалларлыҡ түгел шул, бер ерҙе емерә, икенсе ерҙә яңынан ҡороп та ҡуя.

– Ысынлап та, – тип уға ҡушылды был мажаралы сәйәхәттән һуң етдиләнеп киткән Илнур. – Беҙ ентекләп ҡарай алманыҡ, бәлки, кергән юлыбыҙ ҙа яңыраҡ ҡына асылып киткәндер?



– Эйе ләһә! – тип уларҙы ҡеүәтләне Айнур. – Беҙҙең аҫтыбыҙҙа әллә ниндәй ҡыуышлыҡтар ятәлыр, ҡапыл ғына ер убылып, тишектәр асылыуы бер бөгөнмө ни?..

– Мөғжизәле серҙәре күп шул Тәбиғәттең, һеҙҙең ғүмерегеҙгә етер әле асыштар, – тип ҡуйҙы Илнурҙың атаһы. – Был тирәне бала саҡтарҙа беҙ ҙә әҙ ҡыҙырманыҡ, шулай ҙа мәмерйә һынлы мәмерйәне асыу һеҙҙең өлөшкә төшкән икән...



– Еребеҙҙең аҫты ла, өҫтө лә асылмаған серҙәр даръяһы инде, ҡыҙыҡһына белгән кешегә ул көн дә берәй бүләк әҙерләп тора, – тигән һығымта яһаны Миҙхәт ағай, тап дәрестә һөйләгән һымаҡ итеп. Был ваҡытта улар ауылға етәрәк иркенәйгән юлға сығып, Илнур, Айнур һәм Гөлнур нисектер бер тирәләрәк атлай башлағайнылар.

– Шунан, малайҙар, тағы барабыҙмы Ҡараташҡа? – тип һораны шым ғына дуҫтарынан Илнур.

– Һе! – тип ҡырҡа яуапланы Гөлнур, – шундай михнәт менән барып тап та, тикшереү эшен хәҙер башҡалар башҡарһынмы?...

**(Өмәнең аҙағы. Шарты журналдың 4-се һанында донъя күрҙе.)**

# ЙОНДОҘҘАР НИСЕК ҠАБЫНА?



**Александр Радулов 1986 йылдың 5 июлендә Түбәнге Тагилда тыуған. Боҙҙа тәүге аҙымын «Спутник» клубында яһай. Атаһы Валерий Юрьевич та Түбәнге Тагил ҡалаһының ошо хоккей командаһында уйнаған. Александрҙың олатаһы ла хоккей мөхитендә ҡайнап, спорт майҙансығының хеҙмәткәре булып эшләй. Шуға ла ағалы-ҡустылы Радуловтар, ғаилә традицияһын дауам итеп, боҙ майҙансығын икенсе өйгә әйләндерә.**

1999 йылда Радуловтар ғаиләһе Ярославль ҡалаһына күсеп китә. 13 йәшлек Александр Ярославль хоккей мәктәбендә шөғөлләнеүен дауам итмәксе була. Тик ундағы тренер, буласаҡ «йондоҙ»ға ҡарап, хоккей һинең шөғөлөң түгел, тип ишекте яба. Радулов юғалып ҡалмай, Мәскәүҙең «Динамо» хоккей клубына яҙыла, йәйләп уның төп составына эләгә башлай. Тик унда нығына алмай һәм клуб етәкселеге Сашаны Тверь хоккей командаһына ҡуртымға бирә. Шунан башлана ла инде геройыбыҙҙың уңыштары. Ул Тверь хоккей һөйөүселәренең кумирына әйләнә. Һәр бер йәш хоккейсының хыялы һымаҡ, Александрҙың да НХЛ-да уйнағыһы килә. Ул ваҡыттағы донъя «йондоҙҙары»ның гәзит-журналдарҙа сыҡҡан фотоларын йыя, улар кеүек булыр өсөн көнө-төнө үҙ өҫтөндә эшләй.



«Динамо» өсөн бер генә уйын уҙғарған Радуловҡа НХЛ белгестәре күҙ һалып, ул НХЛ-дың «Нэшвилл Прэдеторз» клубына юллана. Тик унда ла шунда уҡ төп составҡа эләкмәй, фарм-клубта уйнарға мәжбүр була. Беренсе миҙгелдә үк 32 шайба индереп, 45 пас бирә. Икенсе йылына 62 уйында 61 гол индереп, 93 тапҡыр гол индереүгә булышлыҡ итә, бер осрашыуҙа хатта ете тапҡыр уңышҡа өлгәшеп, 20 йәшлек уйынсы «Нэшвилл»дың төп составына юл ала. Күп тә үтмәй, Рәсәй йыйылма командаһы составына саҡырыу ала. Рәсәй хоккей һөйөүселәренә билдәле булмаған Александр, барыһын да хайран ҡалдырып, команда составында донъя чемпионы исемен яулай. Ул ғына ла түгел, еңеү шайбаһын индерә. Егеттең уңышын бөтә Түбәнге Тагил халҡы байрам итә, олатаһы ҡаланың иң хөрмәтле кешеһенә әйләнә. Шуғамы икән, Радулов тыуған яғына тартыла. Беренсе булып быны «Салауат Юлаев» клубы етәкселеге һиҙеп ҡалып, уның менән ҡыҙыҡһыныуын белдерә.

– Миңә «Салауат Юлаев» клубы бик яҡшы тәҡдим яһаны һәм күп уйлап тормай, улар менән өс йылға контракт төҙөнөм. «Нэшвилл» етәкселегенә уйымды еткергәйнем, улар яғынан бер ниндәй хәбәр булманы. Миңә бында оҡшай. Моғайын, хәҙер күптәр НХЛ-дан КХЛ-ға күсер, тип уйлайым. Килемемде лә йәшермәйем – өс йылда һигеҙ миллион доллар эшләйәсәкмен.

**– Уҙған донъя беренселегендә чемпион булғас, һеҙҙең майкағыҙҙы Рәсәй Президентына бүләк иттеләр. Ә ябай көйәрмәнгә?**

– Президент саҡырыуы буйынса Кремлгә барғанда, беҙҙең менеджер Рәсәй командаһының майкаһын тотоп барҙы. Шул ваҡыт мин уның янына барып: «Медведев тип яҙылғанмы һуң?» – тигәнгә ул: «Юҡ, Радулов», – тип яуап ҡайтарҙы. Мин, шаяртҡандыр тип, көлмә, тигән булдым. Аҙаҡтан инде, ысынлап та, аптыраным...

**– Өфө хоккей һөйөүселәре оҡшаймы?**

– Өфөгә килгәс тә, мин Башҡортостан Президенты кубогы өсөн бәйгелә тәүге уйында уҡ гол индереп, көйәрмәндәрҙең йөрәген яулаҡсы инем. Килеп сыҡманы. Тик нишләптер ундағы бар халыҡ минең фамилиям яңғырау менән дәррәү алҡышланы. Аптыраным. Бәлки, уйында буллит индерә алмағас, боҙға ятып, ҡыҙыҡ күнекмәләр эшләүем хайран иткәндер. Буллит серияһы алдынан иптәшем менән бәхәс ҡорҙоҡ. Йәнәһе, гол индерһәм, ул боҙға сығып, күнекмәләр эшләй, ә инде индерә алмаһам – мин. Һөҙөмтәлә вәғәҙәне үтәргә тура килде. Быны шулай!..

**А. ИШМӨХӘМӘТОВА.**

# Илеш районы



Илеш районы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында, Ҡырғыҙ һәм Йылан ырыуы башҡорттарының аҫаба ерҙәрендә урынлашҡан. 90 ауылда 34 мең кеше йәшәй. Район үҙәге – Үрге Йәркәй ауылы. Районда күпселектә ауыл хужалығы үҫешкән, нефть тә сығарыла.



Гербында алтын фонға төшөрөлгән зәңгәр ромб эсендә алтын яллы көмөш арғымаҡ сабып бара. Аҫ яғында был ерҙәрҙең муллығын сағылдырыусы иген көлтәһе төшөрөлгән. Гербтың ике яғында ошо районда йәшәгән башҡорттарҙың ырыу тамғалары – ҡабырға һәм әүернә тора.

Райондың флагы герб элементтары урын алған дүрткел туҡыманан ғибәрәт.

Авторы – Салауат Ғиләжетдинов.



# МӨСӘЛ ИҪӘБЕ ҠАЙҘАН БАШ АЛА?

„АМАНАТ" энциклопедияһы




**Ай-ҡояш календарының 12 йыллыҡ мөсәл иҫәбе буйынса, киләһе 2011 йыл аҡ ҡуян йылы һанала. Боронғо Ҡытай календары Юпитер (ул ҡояш тирәләй 12 йылда бер әйләнеш яһай) һәм Ерҙең Ҡояш тирәләй һәм айҙың Ер тирәләй әйләнеүен тап килтереп эшләнгән. Һеҙәмтәлә һәр йылға бер хайуан исеме бирелгән 12 йыллыҡ цикл килеп сыға, ә уларҙың биш төҫ менән билдәләнеүе арҡаһында 60 йыллыҡ Оло быуат хасил була. Быға бәйле бер легенда ла бар. Имеш, Будда үҙенә төрлө хайуандарҙы саҡырған да, килгән береһенә бер йылды бүләк итеп барған. Тик уға килер өсөн башта ҙур ғына йылғаны аша сығырға кәрәк булғас, һәр бер йәнлек тә килеп етә алмаған.**





Беренсе булып сысҡан килеп еткән һәм уға тәүге йыл эләккән. Ә бына икенсе һәм өсөнсө урын өсөн талашҡан Үгеҙ менән Барыҫты күҙәтеп торған башҡалар дүртенсе булып кем килгәнен абайламай ҡалған: ҡуянмы, кроликмы (улар тураһында 19-сы биттә уҡығыҙ), әллә бесәйме? Ана шуға ла был йылды төрлө ерҙә төрлөсә атап йөрөтәләр икән.









Башҡорттарҙың мөсәл иҫәбендә лә йылдар шундай тәртиптә килә. Мәҫәлән, башҡорт халыҡ риүәйәттәре буйынса йылды беренсе күргән сысҡан үгеҙҙең ҡолағына кереп ултырған да ҡояш сығыуын тәүләп күреп өлгөргән.





Һәр йыл үҙенең исемен биргән хайуандың холоҡ-фиғелен, сифаттарын алып килә, тигән фараз йәшәй.

Һәр 60 йыл эсендә бер йәнлек биш төҫтә ҡабатланып сыға. Улар биш стихияны тәшкил итеп, түбәндәге һандарға тура килә:

**4,5** – ағас (йәшел һәм зәңгәр төҫтәр);

**6,7** – ут (ҡыҙыл һәм алһыу);

**8,9** – ер (һары төҫ);

**0,1** – металл (аҡ төҫ);

**2,3** – һыу (ҡара һәм күк төҫтәр).





Шуға күрә йылдарҙы төҫө буйынса ла айыралар – мәҫәлән, 2011 йыл аҡ ҡуян йылы буласаҡ. Әйткәндәй, көнсығыш календары буйынса ул 3 февралдә генә башланып, 2012 йылдың 22 ғинуарында ғына тамамланасаҡ.

Ҡуян йылының нисек киләсәген унан алдағы “ҡуянға” ҡарап самаларға мөмкин. 1999 йыл әллә ни шәп яҡтары менән тарихта ҡалманы: Югославияла һуғыш, Рәсәйҙә теракттар теҙмәһе, Чечняла дауам иткән ҡан ҡойош, президент Ельциндың вазифаһын Путинға ҡалдырып китеүе... Ә башҡорттарҙа мөсәл иҫәбе буйынса Ҡуян йылына ҡарата ошондай әйтем бар: сысҡан йылы туҡлыҡ, ҡуян йылы йотлоҡ булыр.





Ҡуян йәшелсә яратыусы йәнлек. Шуға уның йылын ҡаршылағанда байрам өҫтәлендә йәшелсә-емеш күберәк булырға тейеш. Шыршы төбөнә, килер ҡуяндың күңелен күрер өсөн, берәй услам кишер һалып ҡуйығыҙ.





# Башваткыс

## Ҡыҙыҡ йомаҡтар

1. Итheҙ, hөйәкheҙ, ә үҙе биш бармаҡлы.
2. Ул: “Мин – hыу, үҙем hыу өҫтөндә йөҙәм”, – ти. Был нимә?
3. Бер яғым урман, икенсе яғым – ялан. Мин нимә?
4. Көн менән төн нимә менән бөтә?
5. Ҡала һәм ауыл араһында нимә бар?

**Яуаптар:** 1. Бирсәтке. 2. Боҙ. 3. Тун. 4. “Н” хәрефенә. 5. “һәм” һүҙе.

## Ябай ғына мәсьәлә

Ике кеше бер ағасты  бер минутта киҫә. Улар биш метрлыҡ ағасты берәр метр оҙонлоҡта нисә минутта киҫеп сығырҙар?

**Яуап:** 4 минутта – һуңғы тапҡыр бер юлы ике метр киҫелә.

## Ҡатмарлыраҡ мәсьәлә

Араларына арифметик тамғалар ҡуйып, 100 һанын дүрт 5; биш 5; ете 6; ете 7 менән сығарырға.

**Яуап:** (5+5)x(5+5)=100; (5+5+5+5)x5=100; 666:6-66:6=100; 777:7-77:7=100.

**Нурулла Миһранов төҙөнө.**
**Белорет районы, Манышты ауылы.**

## Бәһлеүәнлегегеҙҙе күрһәтегеҙ



Ике таяҡтың ике яҡ осонан да ике кешене тоттороп, ҡапма-ҡаршы баҫтырығыҙ ҙа, таяҡтың береһенең уртаһына оҙон бау бәйләп, уны бер нисә тапҡыр таяҡтар аша урағыҙ. Хәҙер һеҙ бауҙың икенсе осонан тарта башлаһағыҙ, таяҡтар бер-береһенә яҡынлаша башларға тейеш. Ә теге кешеләр уларҙы ебәрмәҫкә тырыша. Ләкин нисек кенә тырышмаһындар, улар дүртәүләшеп тә бер кешене еңә алмай.

# КӨЛӘМӘСТӘР

Ҡайһы саҡта машинаның тәҙрәһе ҡыйралыу сәбәпле уның сигналы сайылдамай, ә киреһенсә, ул сайылдаған өсөн тәҙрәһе ҡыйралған булып сыға.

* * *

**Иртәнсәк оҙағыраҡ йоҡларға уйлаһағыҙ, кистән үк йыуынып, кейенеп, тамағығыҙҙы туйҙырып ятып йоҡлағыҙ.**

* * *

– Рәсәй разведчигы Сидоровты Мәскәүгә ҡайтҡас тотоп аталар. Ул Пентагонда булғанда, уларҙың компьютерҙарында бик ҡиммәтле мәғлүмәттәргә юлыға, әммә мониторҙы ғына урлап алып ҡайта.

* * *

**Зоокибеттә:**

**– Был тутыйғош нисә һум тора?**

**Һатыусы:**

**– Үҙенән һорағыҙ. Үҙенең баһаһын үҙе яҡшыраҡ беләлер...**

* * *

– Ринат, кәбеҫтә күбәләген нисек юк итергә? – тип һорай биология уҡытыусыһы.

– Кәбеҫтәне үҫтермәҫкә, – тип яуаплай Ринат.

* * *

**– Алмас! Һин мине иртәгә һигеҙенсе яртыла уят!**

**– Ярар. Тик һин миңә сәғәт етелә төрт, юғиһә мин дә йоҡлап ҡалырмын...**

* * *

Бер батша күрәҙәсенән:

– Мин ҡасан үлермен икән? – тип һорай.

– Байрам көнөндә, – тигән тегеһе.

– Уны ҡайҙан беләһең?

– Бәй, һин үлгән көн ҙур байрам буласаҡ бит! – тип яуаплаған күрәҙәсе.

* * *

**Киске трамвайға ҙур борғо тотҡан малай килеп керә. Арып-талсығып ҡайтып барған кешеләргә күңелле генә ҡарап ала ла, былай ти:**

**– Шунан, иптәштәр, унар тәңкә йыябыҙмы, әллә миңә концертымды башларғамы?**




**Тышылыктың беренсе битендә Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ фотоһы.**


**АМАНАТ**©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 12 (805), Декабрь, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәррирләт:

Артур СУРИН, Розалия САБИРОВА, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Айһылыу АБДУЛЛИНА (баш мөхәррир урынбаҫары), Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.

Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.

Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.

Издается с марта 1929 года.

Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныклыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:

450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.

450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:

баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 277 – 74 – 80; компьютер бүлеге – 223 – 91 – 83

e-mail: amanat@yandex.ru

Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:

г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала "АМАНАТ"
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО "УралСиб",
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.

Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».

Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.


Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.


Баҫырға ҡул ҡуйылды 03.12.2010. Ҡағыҙ форматы 84x108 $^1/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 11072. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0164.10.

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# Минең республикам!

**Әбйәлил районының Яңы Балапан ауылынан килгән һүрәттәр:**

1. **“Минең республикам”.** Фәлимә Сөнәғәтова.
2. **“Атай йорто”.** Әлиә Харрасова.

**Хәйбулла районының Сиҙәм мәктәбе уҡыусыларының ижади эштәре:**

3. **“Күпер”.** Айгөл Сиражетдинова.
4. **“Урғаҙа йылғаһы”.** Мәликә Әфләтүнова.
5. **“Хәйбуллам – тыуған төйәгем”.** Ирина Васильченко.
6. **“Йәй”.** Әлиә Закирова.
7. **“Тыуған яғым”.** Әҙилә Фәйзуллина.
8. **“Ата-бабаларыбыҙ торған ер”.** Зөлфиә Хәмитова.
9. **“Дала”.** Азат Юлышев.


1


2





3


4


5


6


7


8


9



Журналдың индексы – 73317

Аманат, № 12, 2010 йыл